ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 декабрь (аҡъюлай) 2021

№51.(989)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Нисек уйлайһығыҙ:** хаҡтар ни өсөн арта?




6-7

**Тел бар икән,**



халыҡтың тарихы, рухиәте лә бар 8-9

**Сәхнә образдарымды…** өйөмә алып ҡайтмайым



10

**Яңы тажэәхмәт килә…**




13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән яҙылыу 22 декабргә тиклем оҙайтыла. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең киләһе йыл буласаҡ 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Декабрь башында беҙ, гәҙәттә, тыуған көнөн билдәләп, Аҡмулланың аҫыл һүҙен иҫкә төшөрәбеҙ. Көндәлек тормошта һеҙ кемдәрҙең аҡыллы һүҙенә, кәңәшенә мөрәжәғәт итәһегеҙ?

***Рина ЙЫҺАНУРОВА, Сорғот ҡалаһы:*** Эйе, күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе, XIX быуаттың иң атаҡлы һүҙ оҫтаһы Мифтахетдин Аҡмулла, ысын исеме Камалетдинов Мифтахетдин Камалетдин улы икәнлеген дә иҫкә төшөрөп үтәйек, йыл һайын тиерлек декабрь айында шиғриәт һөйөүселәрҙе, уҡытыусыларҙы, уҡыусыларҙы, студенттарҙы, китапхана хеҙмәткәрҙәрен үҙенең шәхесе янына туплай.

Был шулай булырға тейеш тә, сөнки Аҡмулланың шиғырҙары бөгөнгө көндә лә бик актуаль, ҡайһы берҙәре, әйтерһең дә, яңы ғына яҙылған кеүек. Мин әле булһа теге йәки был икеләнеү уйҙары тыуһа, уның ижадына мөрәжәғәт итәм. Беҙҙең заман проблемаларын да үҙ эсенә алған улар, беҙҙе әхлаҡи яҡтан тәрбиәләй, әҙәп, тәрбиә күнекмәләрен бирә, белем алырға тырышырға, ниндәй генә осраҡта ла кеше булып ҡалырға өндәй.

Мин уҡытыусы ла, тәрбиәсе лә түгел, ә медицина хеҙмәткәре. Мәктәптә Аҡмулла ижадын уҡығанымды иҫләмәйем, уның әҫәрҙәренең ниндәй ҙур мәғәнәгә эйә булыуын урта йәштәргә еткәс аңланым һәм форсат тейгәндә, китабы ҡулыма эләкһә йәки интернетта берәй мәҡәлә килеп сыҡһа, уҡырға тырышам. Уның шиғырҙарының һәр һүҙендә кешене тәрбиәле, иманлы, тәүфиҡлы булырға саҡырған оранды ишетергә мөмкин. Үҙенең аҡыллы шиғри һүҙе менән башҡорт халҡын ғына түгел, ә башҡа төрки халыҡтарҙы ла берләштереп тора бит ул. Тарихтан мәғлүм булыуынса, уның ижады ҡаҙаҡ, татар, төркмәндәрҙә лә билдәле булған. Тотош тәрбиәгә ҡоролған шиғырҙары бер ҡасан да актуаллеген юғалтмаҫ, тип уйлайым. Уның әҫәрҙәрен уҡып, бик күптәр үҙенең холҡо, ҡылығы тураһында уйланыр, дөрөҫ фекергә килер. Түбәндәге юлдарҙа ғына күпме аҡыл ята:

*Иң әүәл кәрәк нәмә - иман, тигән,*
*Ахирәт эштәренә инан, тигән.*
*"Хоҙай, кисер!" - тигән менән эш бөтмәйҙер,*
*"Иман шарты"н өйрәнмәһә - Иван, тигән.*
*Икенсе ҡиммәт нәмә - күңел, тигән,*
*Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.*
*Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,*
*Булмаһа күңел таҙа - күмел, тигән.*

Иман шарты тигәндән, тағы шуны әйтергә теләйем. Аҡмулла уны өйрәнеү хаҡында юҡҡа ғына әйтмәй. Һуңғы йылдарҙа тап ошо тәңгәлдә тәжрибә туплағанға насип булды. Ҡөрьәнде төп нөсхәлә уҡымаһам да, транскрипцияла уҡып, тәржемәһен булһа ла өйрәнергә тырышам. Көндәлек тормоштағы күп һорауҙарыма яуап алдым тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Ҡөрьән - Аллаһы Тәғәләнең бәйғәмбәре Мөхәммәт Саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм аша кешеләргә ебәрелгән изге китап. Мәҙәниәтебеҙҙең бөйөк ҡомартҡыһы булған Ҡөрьәнде белмәй тороп, кешелек тарихының ынтылышлы аҙымдарын һәм бөгөнгө тормошобоҙҙоң мәңгелек менән бәйле булыуын аңлап, шулай уҡ үҙебеҙҙе заман менән бергә атлаусы шәхес итеп тойоп та булмайҙыр, моғайын.

Тормош тәжрибәһе менән маяҡ булған кешеләр ҙә күп эргәмдә. Ғөмүмән, минең янымда - һәр ваҡыт изге күңелле, эше менән дә, холҡо менән дә маяҡ булырлыҡ кешеләр генә. Ауыр саҡта инең ҡуйырлыҡ балаларым, туғандарым, хеҙмәттәштәрем, күршеләрем, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарым бар. Улар Аҡмулла һымаҡ аҡ юл күрһәтеп, тормошомда ныҡлы рухи таяныс булып тора.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӘЙҘӘГЕҘ, КЕМ АЛЫҠ!

**Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы хәбәр итеүенсә, 2021 йылдың 10 декабренән 2022 йылдың 10 ғинуарына тиклем "Башҡортостан Республикаһында иң яҡшы яңы йыл ҡаласығы" конкурсына документтар ҡабул ителә. Конкурста ҡатнашыу өсөн муниципалитеттарға үҙ биләмәһендәге иң яҡшы яңы йыл ҡаласығын һайлап алып, министрлыҡҡа ғариза ебәрергә кәрәк.**

Конкурс түбәндәге номинациялар буйынса уҙғарыла: Өфө ҡала округы райондарында "Иң яҡшы Яңы йыл ҡаласығы"; ҡала округтарында "Иң яҡшы Яңы йыл ҡаласығы" (Өфөнән тыш); ҡала биләмәләрендә "Иң яҡшы Яңы йыл ҡаласығы"; ауыл биләмәләрендә "Иң яҡшы Яңы йыл ҡаласығы"; "Күп фатирлы йорттар биләмәһендә иң яҡшы Яңы йыл ҡаласығы". Конкурсҡа йомғаҡ 11-19 ғинуарҙа яһала. Еңеүселәр дипломдар һәм 100 мең һумдан 2,5 миллион һумғаса аҡсалата премиялар менән бүләкләнә. Был аҡсаны еңеүсе тип табылған муниципаль берәмекте йәки йорт яңы биләмәһен төҙөкләндереүгә тотонорға мөмкин. Конкурста ҡатнашыу өсөн документтар Өфө ҡалаһы, Степан Халтурин урамы, 28-се йорт, 427-се бүлмә адресына йәки novogodnigorodok@gmail.com электрон почтаһына ҡабул ителә.



12+

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ



# ҮҘЕБЕҘҘӘГЕ...

## шүлгәнлекте еңеү кәрәк

**Негатив мәғлүмәт өҫтөнлөк иткән заманда йәшәйбеҙ. Әкиәттәрҙә ҡара көстәрҙең ояһы һыу төбөндә, ер ҡуйындарында, унда дейеү-аждаһалар, ҡәһҡәһәләр йәшәй, улар ер өҫтөнә яуызлыҡ алып сыға, тип һүрәтләнһә, хәҙерге ысынбарлыҡта ул ер өҫтөндә, йәғни интернет сәхифәләрендә, социаль селтәрҙәрҙә. Негативтан нисек кенә ҡотолорға теләһәк тә, һөҙөмтә киреһенсә килеп сыға, шуға унын менән көрәшеү файҙаһыҙмы? Улайһа, һаман да ҡараға мансылып йәшәй бирергәме? Ошо хаҡтағы дәлилдәрем:**

**А** Минеңсә, донъялағы кире уйҙан, негатив фекерҙән ҡотолоуҙың юлын һәр кем фәҡәт үҙенән башларға тейештер, ә икенсе кешенән шулай булыуҙы талап итеп түгел. Нимә генә тимә, һәр бер талап үҙенә ҡаршы көстәрҙе лә уята һәм ойоштора. Был осраҡта негативҡа ҡаршы көрәшеүсе, киреһенсә, негативты барлыҡҡа килтереүе ихтимал. Негативты ҡабул итмәүсе кешеләр күбәйгән һайын, уларҙың позитив фекере донъяны яулай барһа, негативҡа урын кәмей, был - беренсенән; икенсенән, үҙенең ысын баһаһын белеүсе башҡаларға насарлыҡ теләмәйҙер, уларға ауыр һүҙ әйтмәйҙер, үҙенең позитивлыҡ өлгөһөн генә күрһәтәлер. Аҡыл өйрәтеп кенә кешене тәрбиәләп буламы? Рауил Бикбаевтың шундай шиғыр юлдары ла бар:

*Тел осомда саҡ-саҡ тотҡанымда*
*Ҡай берәүгә рәнйеү һүҙемде,*
*Ишетәмен күңелем өндәшкәнен:*
*- Үҙеңде бел тәүҙә, үҙеңде!*

Ошоларҙан сығып ниндәй һығымта яһарға була, тип уйлайһығыҙ? Эйе, негативтың донъяны яулай барыуы, һис һүҙһеҙ, ҡараңғы уйҙарҙы йөрөтөүсе кешеләрҙең күплегенән килә. Шулай булғас, үҙеңде яҡты уйға көйләп өйрәнеү лазым. Яҡтылыҡтың шундайын ғәжәйеп сифаты бар: ул бер урында ғына бикләнеп ҡалмайынса, бар донъяны яҡтырта.

**Б** Ҡараңғы төндө әрләүгә ҡарағанда яҡты көндө маҡтау отошлораҡ. Шул уҡ ваҡытта яҡты көн дә ҡараңғы төн йөҙөндә барлыҡҡа килә. Йәғни, көндөң яҡты, айҙ, ҡояшлы булыуын беҙ ҡараңғы төн менән сағыштырып ҡарағанда ғына күрә һәм баһалай алабыҙ. Төн ни тиклем ҡараңғы булһа, көн дә шул тиклем сағыуыраҡ. Урамдағы һалҡында ни тиклем өшөһәк, өй йылыһының да ҡәҙерен шул тиклем беләбеҙ. Позитив негатив булғаны өсөн генә ыңғай күренеш булып иҫәпләнә.

**В** Негативтан ҡотолоп булмаған һымаҡ, уны инҡар итә лә алмайбыҙ. Юҡҡа ғына Әҙәм менән Һауаны ергә һөргән саҡта Хоҙай уларҙың артынан Иблисте эйәртеп ебәрмәгән. Әгәр ҙә Иблис уларҙы туҡтауһыҙ башҡа ҡиммәттәргә әүрәтеп-ымһындырып, баштарын бутап тормаһа, улар ойорҙар һәм үҫеш туҡталып ҡалыр ине. Был йәһәттән Урал батыр менән Шүлгән ҡапма-ҡаршылығы һәр дәүер өсөн дә үрнәк булырлыҡ. "Полярлыҡ" тигән шиғырым ошо хаҡта:

*Бер ҡараһаң, көлөрлөк тә,*
*Бер ҡараһаң - иларлыҡ.*
*Донъя ҡапма-ҡаршылыҡлы,*
*Ә фәндә ул - полярлыҡ.*
*Кешелекте һәләкәттән*
*Ҡотҡарған Урал батыр.*
*Шүлгән уның үҙ ағаһы,-*
*Киткән бит һулға тартып.*
*Яуызлыҡ та, изгелек тә*
*Икеһе лә бер туған.*
*Урал башҡорт булған һымаҡ,*
*Шүлгән дә башҡорт булған.*
*Әсәнән бит алаһы ла,*
*Ҡолаһы ла тыуалыр.*
*Төн булғанға көн-көн, тиеп*
*Аталалыр – шуғалыр...*
*Ошо хәлде аңлағас та,*
*Нимәләр һуң тиергә?*
*Ҡала үҙебеҙҙә булған*
*Шүлгәнлекте еңергә.*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

? ***Декабрь башында беҙ, гәҙәттә, тыуған көнөн билдәләп, Аҡмулланың аҫыл һүҙен иҫкә төшөрәбеҙ. Көндәлек тормошта һеҙ кемдәрҙең аҡыллы һүҙенә, кәңәшенә мөрәжәғәт итәһегеҙ?***

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез ҡалаһы:*** Һәр кем бала саҡтан кемгәлер оҡшарға тырыша, унын һүҙҙәрен, ҡылыҡтарын ҡабатлай, өлгө итеп ҡуя. Юлында аҡыллы кеше осрап, хаҡ һүҙҙәре менән тормош ҡатмарлыҡтарын үтергә ярҙам итһә, ысынлап та, һинән дә бәхетлерәк кеше юҡтыр.

1967 йылда Күмертау ҡалаһы Юрий Гагарин исемендәге 2-се интернат-мәктәбендә башҡорт кластары асыла. Унын инициаторы Хәҙисә Кинйәбаева минең дә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булды. Хәҙисә Ғимран ҡыҙы беҙгә, төрлө райондарҙан йыйылған ауыл балаларына, әсә телен өйрәнеү, белем алыу, уҡыу, тырышыу кәрәклеген шағир Мифтахетдин Аҡмулланың шиғыры аша аңлатты. Унын тоғролоҡ, ғәҙеллек, инсафлыҡ, ихласлыҡ талаптары тураһында кеше күңелендә ғүмергә ҡалырлыҡ һүҙ оҫталығы менән әйтеүен төшөндөрҙө. Шул ваҡыттан алып Аҡмулла минең хәтеремдә үҙ халҡына, башҡорттарым, тип өндәшкән беренсе шағир булараҡ тороп ҡалды. Быны мин милли мәсьәләгә ҡағылышлы һәр осраҡта иҫемдә тоттом һәм тотам.

Хөрмәтле уҡытыусым милләте өсөн тырышҡан башҡа кешеләр тураһында ла беҙгә ҙур ихтирам менән һөйләне. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Шәйехзада Бабичтың "Большевиктар менән килешеү турала көйлө хитабы"н ҙур тираж менән баҫтырып сығарҙылар. Ә мин әлеге уҡытыусым арҡаһында Бабич әҫәренең тулы варианты менән күптән таныш инем инде. Бына ошо уҡытыусым биргән һабаҡ минең өсөн ғүмер буйы ярҙамсым да, тел мәсьәләләрендә кәңәшсем дә булды һәм булып ҡаласаҡ. Тормош юлымда осраған икенсе кеше - шағир, журналист, йор һүҙле дуҫым Сулпан Имانғолов. Ул һәр ваҡиғаға халыҡ мәҡәлдәре аша ҡараны, улар аша баһа бирҙе. Унын эш өҫтәлендә төрлө халыҡтың мәҡәл-әйтемдәре, фразеологик һүҙлектәре ята торғайны. Һәр яҙған мәҡәләһенә исемде ошо йыйынтыҡтарҙан эҙләй ине.

Шулай бер район гәзите хеҙмәткәрҙәре "Какие сани, такие и сами", тигән мәҡәлде "Үҙҙәре нисек, саналары ла шулай", тип тәржемә иткән дә, Сулпан ағай һүҙлекте асып, был мәҡәлдең башҡортсаһы "Силәгенә күрә ҡапҡасы" булыуын аңғартты. Шунан алып урыҫсанан тура тәржемәнең ни тиклем мәғәнәһеҙ икәнен аңланым. Александр Пушкин 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәксеһе Емельян Пугачев та телмәрендә халыҡ мәҡәлдәренә йыш мөрәжәғәт итеүе хаҡында билдәләп үтә. Быуаттар элек әйтелгән фразалар бер нисә быуын халҡы тарафынан шымартыла, тормош ваҡиғалары менән дөрөҫләнә һәм авторы билдәһеҙ мәҡәлдәргә әйләнә. Шуға күрә мәҡәлдәрҙе юлдаш итеп алған кеше бер ваҡытта ла отолмай, юғалып ҡалмай, тура һәм хаҡ юлды табырға һәләтле була. Мәҡәлдәрҙе атай-олатайҙарыбыҙ яҙма тел юҡ саҡта уҡ сығарып, ауыҙ-тел ижады булараҡ мираҫ итеп ҡалдырған. Уларҙа, ысынлап та, иҫ киткес ҙур аҡыл ята. Беҙгә тик дөрөҫ ҡулланырға ғына кәрәк. Минеңсә, тормош юлын үткәндә аҡыллы кешеләрҙең фекерен дә, төрлө мәҡәлдәрҙе лә ҡулланыу мотлаҡ.

Һуңғы осорҙа теге йәки был шәхес тураһында фекеремде һорашыусылар күбәйҙе. Минең ыңғай фекерҙе ишетеп, йыш ҡына төрлө булыр-булмаҫ ғәйеп өйөргә маташыусылар ҙа табыла. Мин был осраҡта иһә мәҡәлдәргә мөрәжәғәт итмәйем, ә тик күренекле милләттәшебеҙ Аҡмулланың билдәле бер шиғырындағы фекерен генә килтерәм: "Нәжес менән күпме генә буяһаң да, алтын алтын булыуҙан туҡтамай".

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республикала коронавирустан вафат булғандар һаны 4 меңдән артҡан. Тәүлек эсендә коронавирустан 22 үлем осрағы теркәлгән. Оперштаб мәғлүмәттәре буйынса, республикала сирлеләрҙең дөйөм һаны - 116 309 кеше. Бер тәүлектә уларға 496 яңы осраҡ өҫтәлгән. 6 меңдән ашыу кеше амбулатор шарттарҙа дауалана. Бөтәһе 105 360 пациент һауығып сыҡҡан, шул иҫәптән һуңғы тәүлектә - 405 кеше. Тәүлек эсендә 60-тан ашыу кешегә дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡорт теле көнөндә шағир һәм мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың һәйкәленә сәскәләр һалды. Быйыл республика унын тыуыуына 190 йыл тулыуҙы билдәләй. Тантанала Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Урал Килсенбаев, Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов һәм башҡа ҡунаҡтар ҡатнашты.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров коронавирус таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек режимы тураһында указға үҙгәрештәр индерҙе. Билдәләнеүенсә, сит дәүләттәрҙән Башҡортостанға килгәндәр коронавирусҡа ПЦР-тест үткәндән һуң 14 көн изоляция режимын үтәргә тейеш. Бында Ботсвана, Зимбабве, Лесото, Мадагаскар, Мозамбик, Намибия, Танзания, Эсватини, Көньяҡ Африка Республикаһы һәм Гонконг хаҡында һүҙ бара. Был Рәсәйҙең башҡа төбәктәре аша транзитҡа ла ҡағыла.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә ТАСС мәғлүмәт агентлығында Рәсәйҙең махсус иҡтисади зоналарының инвестиция йәлеп итеү буйынса милли рейтингы презентацияһына арналған матбуғат конференцияһында ҡатнашты. "Беҙ Алға" махсус иҡтисади зонаһын булдырғанда коллегаларҙың тәжрибәһенән өйрәндек. Беҙҙең делегациялар Мәскәүгә, Мәскәү өлкәһенә, Татарстанға барып ҡайтты. Ундағы махсус иҡтисади зоналар 10 йылдан ашыу эшләгән, улар ҙур тәжрибә туплаған", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең сығышында.

✓ Әбйәлил районы үҙәк дауаханаһына 11,3 млн һумлыҡ рентген комплексын ҡулланыуға тапшырҙылар. Аппаратура "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты һәм төбәктең был тармаҡты модернизациялау программаһы сиктәрендә республика министрлығы тарафынан һатып алынған.

КӨНАУАЗ

# КАРТУФ ҮҪТЕРӘЙЕК!

**Ниһайәт, юғарыға ла барып етте, бугай, был аҡыл. Уңдырышлы ерҙәргә бай була тороп та, Рәсәйҙең Египет картуфы менән Израиль йәшелсәһенә ҡарап ҡалған көнө ине бит…**



Ситтән килтерелгәндең сифаты яғына күҙҙе йомған хәлдә лә, санкция заманында йәшәүебеҙҙе лә оноторға ярамай: бөгөн бар - иртәгә юҡ улар. Иң мөһиме - үҙең етештереү, юғиһә, тиҙҙән рәсәйҙәр картуф сәсеп үҫтереүҙең ни икәнен дә онота башлаясаҡ! Рәсәй - ҙур ил, унда төрлө климат шарттарында төрлө халыҡ йәшәй - бөгзе берәүҙең картуф-йәшелсә үҫтерергә объектив мөмкинлеге лә, ваҡыты ла юҡтыр. Ә Башҡортостанды ни өсөн картуф менән Әзербайжан йә Төмән өлкәһе тәьмин итеп торорға тейеш? Ни өсөн республикабыҙ үҙ халҡын үҙендә үҫтерелгән "икенсе икмәк" менән туйындыра алмай? Үҙ ереңдә үҫтергәнгә етәме һуң!

Үкенескә, хәҙер ауылдарҙа ла ҡайһы берәүҙәр картуф сәсмәй башланы, уларҙың шәхси картуфлыҡ ерҙәрен ҡый баҫты, әрәм булып, буш ятҡан участкалар күбәйҙе. Баҡтиһәң, ғөмүмән, һуңғы 20 йылда Рәсәй халҡында йәшелсә-картуф үҫтереүгә ҡыҙыҡһыныу кәмей бара икән. Һуңғы биш йылда ғына ла кешеләрҙең шәхси ярҙамсы хужалыҡтарында картуф етештереү 19 процентҡа кәмегән. Быны төрлө сәбәптәре барҙыр, күрәһең. Ауылдарҙа йәшәүсе ҡайһы берәүҙәрҙең үҙ ихтыяжы өсөн дә картуф сәсмәүен аңлауы ҡыйын, әлбиттә. Ялҡаулыҡмы? Бәлки. Был айырыуса йәш быуын вәкилдәренә ҡағыла: уларҙың картуф сәсергә барымы ла, теләге лә, бая әйтелгәнсә, "ваҡыты" ла юҡ, өлкән быуындың иһә теләге булған хәлдә лә, элеккеләй көсҡеүәте юҡ.

Ә бына фермер һәм шуның кеүек эрерәк күмәк хужалыҡтар өсөн йәшелсәселек зыянлы шөғөл иҫәпләнә икән, сөнки үҫтергәндә һатып, табыш алыу - проблема. Алыпһатарҙар арзан хаҡ бирә, ә уныш хужаларының үҙҙәренә туранан-тура сауҙа баҙарына сығыу юлдары ябыҡ. Хәтерләһегеҙ, баҡса үҫтереүселәргә үҙҙәренән артҡан продукцияны һатыу "дача законы" тарафынан тыйылды. Артыҡ картуф-йәшелсәнде сығарып һатыу өсөн бит хәҙер эшҡыуар булып теркәлергә, картуф һатҡандан аҙмы-күпме генә килемеңдән һалым түләргә кәрәк тәһә!

Бына бит, кем әйтмешләй, закон ике яҡлы, айырыуса ул ентекле уйланылмай ҡабул ителгән булһа. Дөрөҫөн әйткәндә, закондың был пункты хеҙмәт кешеһенең намыҫына теймәй ҡалмағандыр, сөнки ул бит урлап һатмай, ә үҙе үҫтергәнде! Йылына бер тапҡыр шуны сығарып һатыу өсөн нинә ул чиновник ҡағыҙ ығы-зығыһына дусар ителергә, эшҡыуар булып теркәлергә, өҫтәүенә, һалым түләргә тейеш әле? Ғәрлек бит! Был осраҡта иң һәйбәтеүҙенә етерлек картуф үҫтер ҙә, башҡаһына төкөр, тигәнсә килеп сыға түгелме?

Ҡыҫҡаһы, властар халыҡты баҡсасылыҡ - шәхси ярҙамсы хужалыҡ шөғөлөнә ҡайтанан йәлеп итмәксе. Күптән кәрәк ине, сөнки күршең уңышына өмөт итеп ятыу - түбәнселек. Сит илдән килтерелгәндә лә йүне юҡ. Шулай итеп, РФ Ауыл хужалығы министрлығы илдә картуф һәм йәшелсә үҫтереүҙе арттырыу маҡсатында махсус федераль проект әҙерләй. Унда шулай уҡ етештерелгән уңышты һаҡлау һәм һатыу мәсьәләләре лә юлға һалынасаҡ. Был программаны бойомға ашырыу сараларына 5 млрд һум аҡса тотоноу ҡарала. Илдә етештерелгән бөтөн кафтуф һәм йәшелсәнең яртыһынан күбеләге шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙа үҫтерелә, шуға күрә киләһе йылдан фермер һәм башҡа күмәк хужалыҡ төрҙәре менән бер рәттән, шәхси ярҙамсы хужалыҡтарға ла дәүләт ярҙамы күрһәтелә башлаясаҡ. РФ ауыл хужалығы министры Дмитрий Патрушев 10 ноябрҙәге хөкүмәт кәңәшмәһендә Рәсәй Президенты Владимир Путинға ошо хаҡта хәбәр итте. Картуф һәм йәшелсә етештереүҙе арттырыу буйынса быңдай ашығыс саралар ошо ризыҡ төрҙәренә самаһыҙ хаҡтар артыу менән бәйле. Өҫтәүенә, үткән йәйҙәге ҡоролоҡ етерлек күләмдә картуфйәшелсә туплау кәрәклегенә яҡшы ғына ишара ла булды, күрәһең.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Декабрь башында беҙ, әҙәттә, тыуған көнөн билдәләп, Аҡмулланың аҫыл һүҙен иҫкә төшөрәбеҙ. Көндәлек тормошта һеҙ кемдәрҙең аҡыллы һүҙенә, кәңәшенә мөрәжәғәт итәһегеҙ?***

***Гөлфиә АРЫҪЛАНБӘКОВА, Көйөргәҙе районы:*** Аҡмулланың аҡыллы һүҙҙәре декабрь айында ғына түгел, йыш ҡына иҫкә төшә. Мәғрифәтсенең "Башҡорттарым , уҡыу кәрәк !" шиғыры ғына ни тора һуң! Уны мин һаман булһа яттан һөйләп йөрөйөм:

> *...Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!*
> *Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк .*
> *Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,*
> *Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!*

Ғөмүмән, уның шиғырҙары еңел иҫтә ҡала. Йыш ҡына социаль селтәрҙәрҙә шағирҙың "Нәсихәттәре"н яттан һөйләүселәрҙе, мөнәжәт итеп әйтеүселәрҙе ишеткәнем бар. Улар араһында ярайһы оло йәштәгеләр ҙә осрай. Борон да Аҡмулланың шиғырҙарын шунда уҡ отоп алып, яттан һөйләп йөрөгәндәре хаҡында уҡығаным бар.

Мәғрифәтсенең әйткән һәр һүҙендә халҡымдың тәрән аҡылы ята. Һарандарҙан, ҡарундарҙан, ғәйбәтселәрҙән яҡшыны өмөт итергә ярамағанлығын, ялҡауҙарҙың бер ҡасан да алға китмәүен, тәкәбберҙәрҙе, байлығы менән маҡтаныусыларҙы ҡасан да булһа аҡылға ултыртырлыҡ ваҡиға булыуын иҫкәртеп тора. Ҡайһы бер шиғри юлдары мәҡәлдәргә ауаздаш. Ә халыҡ ижадының был жанрындағы һәр тема бөгөнгө көндә лә бик актуаль.

Мин үҙем мәҡәл-әйтемдәргә йыш мөрәжәғәт итәм. Унда боронғоларҙың тотош тормош тәжрибәһе һалынған. Башҡорт халыҡ ижадының 10-сы томы - минең өҫтәл китабым ул. Элегерәк китап магазинына инһәм, иң беренсе мәҡәл-әйтемдәрҙе эҙләп табам. Башҡа милләттәрҙеке менән дә ҡыҙыҡһынам, үҙебеҙҙеке менән сағыштырам, оҡшашлыҡтарын йәки айырмаларын эҙләйем. Йыш ҡына ҡапма-ҡаршылыҡтарға юлыҡырға тура килгәне бар. Әммә күп осраҡта тиерлек бөтә халыҡтарҙың да тапҡыр һүҙҙәренең мәғәнәһе тура килә.

Беҙ бәләкәй саҡта өйҙә ололар мәҡәл менән генә һөйләшә торғайны. Бигерәк тә өләсәй менән олатай. Атайым кинйә бала булыу сәбәпле төп йортта ҡалды, шуға күрә беҙгә өләсәй-олатай мәктәбен үтергә насип булды. Уларҙың беҙҙе әрләгәнен хәтерләмәйем, риүәйәт, әкиәт һәм әйтемдәрҙе көндәлек тормошта киң ҡулландылар. Күбеһен әле булһа иҫләйем һәм ҡулланам: "Өйөңдө таҙа тот, көтмәгәндә ҡунағың килер, үҙеңде таҙа тот, көтмәгәндә әжәлең килер", "Ҡыҙ кешене ҡырҡ ерҙән тый", "Килен кешенең рәхәте, ҡыҙ саҡтың михнәте", "Ялҡауҙы ашҡа саҡырһаң саҡыр, эшкә саҡырма". Бына шундай мәҡәл-әйтемдәрҙең барыһында ла халҡымдың тәрән аҡылы, быуаттар буйына йыйылған тормош тәжрибәһе һалынған. Ул бер бәләкәй генә һөйләм булырға мөмкин, ә ҙур романға һыймалы мәғәнә тапшыра. "Оло һүҙен тыңламаған - оролған да бәрелгән" кеүек мәҡәлде генә алайыҡ. Бында башбаштаҡланып, үҙең ни теләйһең, шуны эшләп йөрөмәҫкә, ә өлкәндәрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалырға, улар менән кәңәшләшеп эшләргә кәрәклеге тураһында һүҙ бара. Тәрбиәгә ҡағылышлы мәҡәлдәрҙең һәр береһендә халҡымдың тәрән фәлсәфәһе ята.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды башҡорт телен популярлаштырған проекттарҙың презентацияһын үткәрҙе. Презентацияла "Интерактив башҡорт", "Башҡортсофт", "Глосбе" кеүек проекттар күрһәтелде. Хәҙер ошо заманса ҡушымталар ярҙамында тотош һөйләмдәрҙе башҡортсанан руссаға, руссанан башҡортсаға тәржемә итергә, башҡортса телмәрҙең нисек яңғырауын тыңларға мөмкин. Сайтты һәм ҡушымталарҙы тәҙәүселәр уларҙың нисек эшләүен дә күрһәтте. Телгән һәр кем bashkortsoft.ru тәржемәсеһен һынап ҡарай алды.

✓Кеше хоҡуҡтары һәм граждандарлыҡ йәмғиәте институттарын үҫтереү советы әҙерләгән закон проектына ярашлы, етемдәр балалар йорттарында, опекун ғаиләһендә йәшәгәндә, колледждарҙа йәки юғары уҡыу йорттарында уҡыған ваҡытта, шулай уҡ армияла хеҙмәт иткәндә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙән азат ителә. "Етем балалар өсөн гарантиялар темаһы бик мөһим. Етемдәрҙең мәнфәғәттәрен тәьмин итергә һәм манипуляцияға, шул иҫәптән кемдеңдер уларға бирелгән льготаларҙан файҙаланыуына юл ҡуймаҫҡа кәрәк", - тине Владимир Путин башланғысты хуплап.

✓2022 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу датаһы билдәле булды. Сығарылыш уҡыусылары өсөн имтихандар ғәҙәттәгесә уҙғарыла, әгәр коронавирусҡа бәйле хәл ҡатмарлы булһа, төҙәтмәләр индерелеүе мөмкин. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, имтихандарҙың төүге тулҡыны - 21 марттан 18 апрелгә тиклем (пандемия осоронда ул ике йыл уҙғарылманы). Берҙәм дәүләт имтиханының төп осоро 26 майҙан 2 июлгә тиклем билдәләнгән.

✓Башҡортостанда 18 мәктәп кисҡкен респиратор вирус инфекцияһы һәм грипп буйынса карантинда. Ә 77 мәктәптә - өлөшләтә карантин, 904 класта ОРВИ һәм грипп буйынса карантин индерелгән. Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак коронавирус йоҡтороу осраҡтарының кәмеүен билдәләнә, ләкин 7-14 йәшлектәр араһында киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм грипп менән сирләү осраҡтары арта.

✓ *Ул күсеп ҡайтыусы ватандаштарыбыҙға яңы йәшәү урындарында аяҡҡа баҫып китергә булышлыҡ итә. Махсус йүнәлештең төп маҡсаттарының береһе - Башҡортостан вуздарында белем аласаҡ йәштәр һанын арттырыу.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ОҘАЙЛЫ КАНИКУЛҒА

✓**Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин яңы коронавирус инфекцияһы менән көрәш буйынса оператив штаб ултырышында республика мәктәптәрендә яңы йыл каникулдарының 31 декабрҙә башланып, 16 ғинуарғаса дауам итәсәген билдәләне.** Йәғни уҡыусылар дүшәмбе, 17 ғинуарҙа, мәктәпкә бара."Республиканың белем биреү учреждениеларында киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм грипп буйынса ҡатмарлы хәл килеп тыуҙы, 62 339 уҡыусы, 1 083 уҡытыусы сирләй. Шулай ҙа яңы йыл каникулдары киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән ауырыу күрһәткестәрен ярайһы уҡ кәметергә мөмкинлек бирер, тип иҫәпләйҙәр Роспотребнадзорҙа", - тине ведомство башлығы. Әйткәндәй, Рәсәйҙең күпселек төбәктәрендә уҡыусыларҙың яңы йыл каникулдары иртәрәк - 27 декабрҙә башлана. Балалар 10 ғинуарҙа уҡырға бара.

✓**Башҡортостанда социаль координатор тигән яңы һөнәр булдырыласаҡ.** Улар граждандарҙың социаль хеҙмәттәргә ихтыяж кимәлен асыҡлаясаҡ һәм 30 меңләп өлкән йәштәгеләр һәм инвалидтарҙың сикләнгән йәшәү эшмәкәрлеге кимәлен һәм уларҙы ҡарау буйынса төркөмдө билдәләйәсәк. Бынан тыш, социаль координаторҙар өлкән йәштәге кешеләр һәм инвалидтарҙың социаль мәсьәләләре буйынса яҡындан шөғөлләнергә, уларҙы ҡабул итергә теләүсе ғаиләләр менән эшләргә, реабилитациялауҙың техник саралары менән тәьмин итеүгә сертификаттар биреү, инвалид балаларҙы реабилитациялау, әүҙем оҙаҡ йәшәү сараларын алып барырға тейештәр.

✓**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының декабрҙә үткән пленар ултырышында ҡотҡарыу операцияһы ваҡытында зыян килтергән өсөн ҡотҡарыусыларға һалынған яуаплылыҡҡа ҡағылышлы закон проектын ҡабул итергә уйлайҙар.** Парламент спикеры Константин Толкачев фекеренсә, яңы положение ҡотҡарыу хеҙмәте етәкселәренә, ҡотҡарыусыларға хоҡуҡи тотороҡлоҡ һәм яҡланғанлыҡ шарттарында бурысты үтәргә булышлыҡ итәсәк. "Ҡотҡарыу операциялары етәкселәренә ҡатмарлы ҡарар ҡабул итергә һәм үҙҙәренең хеҙмәткәрҙәрен хәүефле бурыс үтәргә ебәрергә тура килә, - ти Константин Толкачев. - Үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға ҡурҡмау һәм үҙ ваҡытында хәүефте күҙаллап, дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү бик мөһим. Был ҡотҡарыусыларға ла ҡағыла. Уларҙың ваҡиға барышында тиҙ һәм дөрөҫ эш итеүе кеше ғүмерен һаҡларға булышлыҡ итәсәк".

✓**Ғинуар-октябрҙә Башҡортостанда йәшәүселәр республиканан ситтә 2,8 мең йорт һәм фатир һатып алған.** Республикала йәшәүселәрҙең Рәсәйҙең башҡа субъекттарында һатып алынған күсемһеҙ милкен теркәү һаны 19,5 процентҡа артҡан. Ҡырым, Краснодар крайы, Силәбе өлкәһе, Санкт-Петербург, Ырымбур, Татарстан, Сорғот (ХМАО-Югра) башҡортостандарҙа айырыуса популяр. Быйыл ун айҙа Башҡортостанда башҡа төбәктәрҙә йәшәүселәр тарафынан теркәлгән күсемһеҙ милек объекттары һаны 15 процентҡа артҡан. Бөтәһе 13 меңгә яҡын ғариза ҡабул ителгән, тип хәбәр иттеләр республика буйынса Росреестр идаралығынан. Татарстан, Силәбе, Төмән, Свердловск, Ырымбур өлкәләре, Мәскәү һәм Санкт-Петербург, Пермь крайы халҡы Башҡортостандағы күсемһеҙ милек менән ҡыҙыҡһына. 2021 йылдың апреленән экстерриториаль килешеүҙәр механизмы ябайлаштырылған. Хәҙер Рәсәйҙең теләһә ниндәй күп функциялы үҙәгендә күсемһеҙ милекте теркәү өсөн ғариза бирергә мөмкин, тип билдәләнеләр Росреестрҙа.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# НИСЕК ҠЫШЛАРҘАР?



**Башҡортостанда бал ҡорттары ҡышлауға күстe: октябрь-ноябрҙә умарталар йылы урынға индерелде. Әммә көндөң йылы тороуы ҡорттар өсөн ҡыйынға тура килеүе мөмкин, ти умартасылар.**

"Бөжәктәрҙең ниндәй шартта ҡышлауы ҙур әһәмиәткә эйә. Иң яҡшыһы - бер тигеҙ температураны һаҡларға булышлыҡ иткән ер аҫты баҙы. Тышта урынлашҡандарында ҡатмарлыҡ тыуыуы ихтимал", - ти Шишмә районы умартасылар йәмғиәте рәйесе Рафаэль Вәлиев. Уның әйтеүенсә, умартасыларҙың төп проблемаһы - балдың арзанлығы. Эшмәкәрлекте алып барыу өсөн кәрәк булған әйберҙәрҙең бөтәһе лә ҡиммәтләнде, ә бал хаҡы былтырғыға ҡарағанда ла түбәнерәк. "Былтыр башлыса республикала йүкә балы булды. Ҡайһы бер умартасыларға уны алыу өсөн күсеп йөрөргә лә тура килмәне. Был балдың үҙҡиммәтен һиҙелерлек кәметте", - ти умартасы.

Шишмә районы биләмәһендә аграрийҙар һәм умартасыларҙың бергә йоғонтоло эшләүе ыңғай һөҙөмтә бирә. Быйыл унда бал ҡорттарының химикаттан үлеү осрағы теркәлмәгән. Варроатоз талпанына ҡаршы үҙ ваҡытында эшкәртелмәүе сәбәпле, бөжәктәрҙең умартаны ташлап китеүе генә билдәләнде.

# ТҮЛӘҮЛЕ ЮЛ




**Дүртөйлө - Әшет трассаһында түләүле юл буласаҡ. Был хаҡта РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Марат Хөснуллин проектты тормошҡа ашырыуға бәйле эш кәңәшмәһендә белдерҙе.**

Ул: "Ҡышын төҙөүселәр Ҡаҙандан Екатеринбургка тиклемге М-12 һәм Дүртөйлө - Әшет трассалары биләмәһендә эштәр башлаясаҡ. Был участкала юл хәрәкәте 2024 йылда башланырға тейеш, шуға күрә ваҡыт бик тар һәм эшләү темпы юғары буласаҡ", - тине. Был проектты тормошҡа ашырыу бурысы "Автодор" Дәүләт компанияһы"на йөкмәтелгән. Әлеге мәлдә ул Дүртөйлө - Әшет биләмәһе планының документтарын ентекле әҙерләүҙе тамамлау алдында.

I-Б категориялы яңы түләүле юл биләмәһе 4 һыҙаттан торасаҡ һәм 275 саҡрым тәшкил итәсәк. Төҙөлөш өс этаптан торасаҡ һәм юл Свердловск өлкәһендә - 43, Пермь крайы сиктәрендә - 92 һәм Башҡортостан сигендә 140 саҡрым арауыҡтарҙа үтәсәк. Был проектты тормошҡа ашырыу яңы эш урындары барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итәсәк. Атап әйткәндә, төҙөлөш барышында 133 мең, ә эксплуатациялау этабында яҡынса 120 мең яңы эш урындары барлыҡҡа киләсәк. Трасса Үҙәк, Волга яны һәм Урал федераль округтарының эре иҡтисади үҙәктәрен берләштерәсәк. Автомобиль йөрөтөүселәр юлда үткәргән ваҡытын 2 тапҡырға кәметә аласаҡ. Мәҫәлән, Ҡаҙан менән Екатеринбург араһын хәҙерге кеүек 14 түгел, ә 7 сәғәттә үтеп буласаҡ.

# БАҠСАСЫЛАР НИ ХӘЛДӘ?



**Бөгөн республикала 500 меңдән ашыу ғаиләнең дача һәм баҡса участкалары бар һәм 1500-ләп коммерция булмаған баҡса ширҡәттәре (СНТ) теркәлгән.**

**Улар һаны буйынса республика Рәсәйҙә 7-се урынды алып тора, тине Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.**

Вице-премьер әйтеүенсә, республикала баҡсасылыҡты артабан үҫтереү өсөн бер нисә төп проблеманы хәл итеү кәрәк. Беренсенән, ер участкаларына милек хоҡуғын атҡарыу мәсьәләһе. 55 проценттан ашыу ер участкаһы кадастр иҫәбендә тормай. Был, тимәк, муниципаль бюджет алып еткермәгән 30 миллионлап аҡса тигән һүҙ. Икенсе мәсьәлә - баҡса участкаларының күпселеге электр уты, һыу һәм газ менән тәьмин ителеп еткерелмәүе. Яҡынса күрһәткестәр буйынса, ширҡәттәр ҡарамағындағы электр селтәрҙәре туҙған. 20 процент участкала электр уты бөтөнләй юҡ. Ширҡәттәрҙең 55 проценты һыу менән тәьмин ителмәгән һәм уларҙың ни бары 33 проценты ғына газ менән файҙалана ала. Баҡсаларға юл торошо һәм транспорт маршруттары ла яҡшынан түгел. Сүп-сар ҙур проблема булып ҡала бирә.

Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, баҡсасыларҙың проблемаларын хәл итеү өсөн 5 йыл эсендә 1,3 млрд аҡса талап ителә. Быйыл иһә Хөкүмәт ҡарары менән ширҡәттәрҙең инженер инфраструктураһы, төҙөлөш, электр уты, газ, һыу менән тәьминәт, юл төҙөлөшө һәм төҙөкләндереү буйынса сығымдарын ҡаплау буйынса субсидия бүлеү тәртибе раҫланды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әйтеүенсә, иҡтисади йәһәттән мөһим өлкә булыуына ҡарамаҫтан, баҡсасылыҡ проблемалары оҙаҡ йылдар буйына хәл ителмәй ҡалып килде. Муниципалитеттарға ширҡәттәр менән эште әлеге кеүек Хөкүмәт кимәлендә берләшеп алып барыу кәрәк. Радий Хәбиров баҡсасылыҡ ширҡәттәренә юлдарҙы тәртипкә килтереү өсөн бюджеттан аҡса бүлеү мәсьәләһен ҡарарға ҡушты. Был эш киләһе йылдың йәйенән башланырға тейеш, тине ул.

# ТЫУҒАН ИЛ САҠЫРА



**Ватандаштарҙы республикаға ҡайтарыу буйынса программа өс йыл эсендә Тажикстанда, Ҡаҙағстанда, Үзбәкстанда, Төркмәнстанда, Әрмәнстанда, Молдовала, Әзербайжанда һәм Украинала йәшәүсе 279 ватандашыбыҙҙың тыуған иленә ҡайтыуына булышлыҡ итте.**

Республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова билдәләүенсә, БР Хөкүмәтенең 2021 йылдың 23 ноябре ҡарары менән ватандаштарыбыҙҙы ҡайтарыу буйынса махсус программаға тейешле үҙгәрештәр индерелде һәм киләсәктә был программа хеҙмәт йәшендәге ватандаштар иҫәбенә эшсе ҡулдар ҡытлығын кәметергә, шулай уҡ уларҙы һәм ғаилә ағзаларын Башҡортостан Республикаһында урынлаштырыу буйынса һөҙөмтәле сара буласаҡ. Был дәүләт программаһының "Сит илдәрҙә йәшәүсе ватандаштарыбыҙға үҙ теләктәре менән Башҡортостанға ҡайтыуҙарына булышлыҡ итеү" йүнәлеше 2018 йылдан алып ғәмәлдә. Ул күсеп ҡайтыусы ватандаштарыбыҙға республикалағы яңы йәшәү урындарында аяҡҡа баҫып китергә булышлыҡ итә. Махсус йүнәлештең төп маҡсаттарының береһе - Башҡортостан вуздарында һәм һөнәри белем биреү ойошмаларында белем аласаҡ йәштәр һанын арттырыу. Был программала ҡатнашыу өсөн БР Миграция мәсьәләләре буйынса идаралыҡҡа - 450000, Өфө ҡалаһы, Гоголь урамы, 47-се йорт адресы, 7 (347) 229-75-11 телефоны; БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығына - 450008, Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 95-се йорт адресы, 7(347) 280-88-07 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә була.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы С. Греков етем балаларға Затон биҫтәһендәге яңы бер бүлмәле фатир асҡыстарын тапшырҙы. Ун кеше яңы фатирлы булды. Ҡаланың торлаҡ бүлеү һәм торлаҡ программалары идаралығы начальнигы Зилә Мөхәмәтова әйтеүенсә, дәүләт һәм республика ярҙамында етемдәргә йыл һайын өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашыу юлы менән бер бүлмәле фатирҙар һатып алына. Быйыл 142 фатир бирелде, шуларҙың 115-е - Затон биҫтәһендә. Йыл аҙағынаса йәнә 19 кеше торлаҡлы булырға тейеш. Киләһе йылда тағы 200 етем балаға фатир тапшырыу күҙаллана.

✓Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков һүҙҙәренсә, ҡала вакцинация буйынса 90 процент сикте үтте. Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығы вәкиле Зөлфиә Камаева һүҙҙәренсә, 13 декабргә республикала 2 089 195 кеше прививканың беренсе компонентын яһатҡан (был вакцина эшләтергә тейешле халыҡтың 84,1 проценты тигән һүҙ). 1 787 162 кеше вакцинацияны тулыһынса тамамлаған (халыҡтың 76 проценты).

✓Яңы йыл һәм Раштыуа каникулдары осоронда "ФПК" акционерҙар йәмғиәте Куйбышев филиалының өҫтәмә поездары юлға сыға. Улар 25 декабрҙән 10 ғинуарға тиклем популяр маршруттар буйлап йөрөй, тип хәбәр итте компанияның матбуғат хеҙмәте. Өҫтәмә поездар Һамар - Мәскәү, Пенза - Мәскәү, Өфө - Мәскәү (Һамар аша), Өфө - Мәскәү (Ульяновск аша), Мәскәү - Димитровград, Мәскәү - Тольятти, Орск - Мәскәү - Орск (Һамар аша) маршруттары буйынса йөрөй.

✓Өфө бала табыу йортонда 58 йәшлек ҡатын әсә булырға әҙерләнә. Сабыйҙың 2021 йылдың декабрь аҙағында донъяға килеүе көтөлә. Әлеге ваҡытта ул йөклөлөктөң 36-сы аҙнаһында. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, бала ЭКО процедураһы ярҙамында яралған.

✓"Пушкин картаһы" - йәштәрҙе мәҙәниәткә ылыҡтырыу дәүләт программаһы, махсус пластик карта менән мәҙәни сараларға билет һатып алғанда ғына түләргә була. Карта иҫәбенә аҡса дәүләттән бүленә, уны 14-22 йәшлектәр ҡулланырға мөмкин. "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле программала әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе булды һәм белем биреү учреждениелары уҡыусылары өсөн концерттар ойоштorҙо. Һуңғы айҙа ғына ансамбль Өфөлә 12 концерт күрһәтте, 5000-гә яҡын тамашасы килде.

**БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨН...

## байрам иттек!

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов оператив кәңәшмәлә Башҡорт теле көнөн билдәләү саралары тураһында бәйән итте. "Был байрамдың идеяһы Аҡмулланың "Нәсихәттәр"ендәге әхлаҡи ҡиммәттәрҙе танып белеүгә һәм популярлаштырыуға бағышланған сараларға нигеҙләнде. Башҡорт теле көнөн уҙғарыу концепцияһы "Ете аҙым" тип атала. 7 декабрҙән башлап, марафондың һәр 7 көнөнөң телде һәм дөйөм кешелек ҡиммәттәрен танып белеүгә аҙым булараҡ билдәләнгән темаһы бар - ул иман, күңел, аҡыл, шөкөр, әҙәп, сабыр һәм ихлас", - тине Азат Шамил улы.**

Шулай итеп, байрам сараларының иң әһәмиәтлеләрен билдәләп китәйек:



● Башҡорт теле көнөндә Башҡорт дәүләт педагогия университетында Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге стипендиаттарға диплом тапшырыу тантанаһы үткәрелде. Университет майҙанында бөйөк шағир һәм мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың һәйкәленә сәскәләр һалыу ойошторолдо.



● Башҡортостандың дәүләт һәм туған телдәрен уҡытыуҙа иң яҡшы педагогик тәжрибәләр "Педагогик оҫталыҡ мәктәбе" республика конкурсына тәҡдим ителгәйне. Конкурс Башҡортостан Башлығы гранты сиктәрендә Мәғариф һәм фән министрлығы менән Башҡорт теле һәм башҡа туған телдәр уҡытыусылары ассоциацияһы тарафынан ойошторолдо. Конкурс һөҙөмтәһе буйынса 32 еңеүсе билдәләнде.




● Мәҙәниәт министрлығының Башҡорт теле көнөнә арналған төп сараларының береһе - "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсы еңеүселәрен бүләкләү тантанаһы булды. Быйыл конкурсҡа 200 ҡатнашыусынан ғаризалар ҡабул ителде. Өс сит илдән һәм Рәсәйҙең 7 төбәгенән 1020 эш конкурста ҡатнашты.

● Башҡорт теле көнө Башҡортостанда ғына түгел, ә Рәсәй Федерацияһы субъекттарында - башҡорттар тығыҙ йәшәгән төбәктәрҙә лә киң билдәләнде. Сараларҙы Ханты-Манси автономиялы округы, Пермь крайы, Свердловск, Ырымбур, Ҡурған, Силәбе өлкәләренең Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәктәре уҙғарҙы. Улар араһында, мәҫәлән, "Башҡорт һүҙе" ғилми-ғәмәли конференцияһы, "Әсәм теле - сәсән теле" төбәк-ара шиғриәт конкурсы, "Тап һүҙ" онлайн-конкурсы һәм башҡалар бар ине.

● Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары хәрәкәте Милли йәштәр театрында Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды менән берлектә музыкаль кисә ойошторҙо. Унда рок-композицияларҙың акустик версиялары башҡорт теленең төрлө диалекттарында башҡарылды. Милли йәштәр театры актерҙары тарафынан билдәле башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың шиғырҙары үҙенсәлекле рок-аранжировкала тәҡдим ителде.

● Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан үткәрелгән Башҡортостан Республикаһы милли инновацион мәктәптәре директорҙары форумы сиктәрендә белем биреү семинарҙары, стратегик сессия, түңәрәк өҫтәл ойошторолдо. "Мәктәп яңылыҡтары" белем биреү курсы ярҙамында етәкселәр Министрлыҡ, Мәғарифты үҫтереү институты, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы вәкилдәре менән көнүҙәк мәсьәләләр буйынса фекер алышты.




● Башҡорт теле буйынса яңы әсбаптар презентацияһы үтте. Унда мәктәпкәсә йәштәге балалар, башланғыс һәм урта класс уҡыусылары, колледж студенттары өсөн төрлө әсбаптар тәҡдим ителде. Улар - башҡорт телен, Башҡортостан халыҡтары мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн "Афарин" уҡыу ҡулланмаһы, өндәрҙе дөрөҫ әйтеүҙе булдырыу өсөн дидактик альбом һәм эш дәфтәре, колледждар өсөн "Башҡорт теле". Яңы әсбаптарҙың нигеҙендә - телде коммуникатив нигеҙҙә уҡытыу, сөнки уҡыусыларҙы башҡорт телендә аралашырға өйрәтеү - төп маҡсаттарҙың береһе.

● М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Милли педагогика форумы уҙғарылды. Кәңәшмәлә педагогик белем биреү өлкәһендәге белгестәр, мәғариф һәм йәмғиәттең үҙгәреш һәм үҫеш мәсьәләләрен тикшереүселәр, Рәсәй төбәктәренән һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренән күп мәҙәнилек һәм күп теллелек шарттарында гуманитар белем биреү мәсьәләләрен өйрәнеүселәр ҡатнашты. Милли педагогика форумы ҡатнашыусылары секцияларға бүленеп эшләне. "Мосолман халыҡтарының рухи донъяһы" халыҡ-ара конференцияһында республикалағы төп дини ойошмаларҙың етәкселәре йыйылды һәм дини тәрбиә, әҙәп-әхлаҡ, үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында һөйләште. Республикала бөгөн дини белем биреү өлкәһендә ниндәй эштәр атҡарылыуы, йәштәрҙе үҙ йола-ғәҙәттәребеҙгә ярашлы дин юлына баҫтырыу, башҡаларға ҡарата дуҫтарса мөнәсәбәттә тәрбиәләү мәсьәләләре күтәрелде.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*



# ИЖАДИ ТЕЛӘКТӘРҘЕ...

## шыршыға элегеҙ!

**Өфөлә "Берҙәм Рәсәй" партияһы проекты сиктәрендә үткәрелгән "Ижади теләк шыршыһы-2022" Яңы йыл акцияһына старт бирелде. Быйыл ойоштороусылар балаларҙың ижади теләктәренә лә иғтибар бирергә ҡарар иткән. Бындай сара Рәсәйҙә беренсе тапҡыр ойоштороla. "Берҙәм Рәсәй" фирҡәһенең төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Рөстәм Әхмәҙинуров был ике акцияның айырмалығын билдәләп, балалар "ижади" акция талаптарына ярашлы үҙҙәренең матди теләген түгел, ә изге хыялын тормошҡа ашыра аласаҡ, тип белдерҙе.**

- "Теләк шыршыһы" - федераль проект һәм ул артабан да тормошҡа ашырыласаҡ. Айырым акция сиктәрендә тап ижади теләктәр үтәләсәк, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Марат улы. - Балалар сәхнә йондоҙо менән сығыш яһау, кумиры менән осрашыу, театрҙа уйнау, ниндәйҙер роль башҡарыу, шулай уҡ футбол матчына, хоккей уйынына инеү, спортсы-кумиры менән осрашыу хыялы тураһында теләктәрен яҙа ала. Мәҫәлән, фехтование буйынса Олимпия чемпионы Аделина Заһиҙуллина "спорт" теләктәрен үтәүҙе үҙ өҫтөнә ала. "Ҡаршылыҡтарҙы еңеп" социаль технологиялар үҙәге директоры Алина Хәбирова балалар өсөн концерт ойоштороуҙан тыш, уларға Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙары концерттарына инеүҙе лә ойоштороrға тәҡдим итте.

"Теләк шыршыһы" кураторы Хәлил Хәмзин акцияның шарттары менән таныштырып: "Теләүселәр "Башҡортостан" дәүләт концерт залының Ленин урамы яғынан инеп, махсус "Ижади теләк шыршыһы" йәшнигенә үҙ теләктәрен яҙып ҡалдыра ала. Шулай уҡ бындай йәшник "Берҙәм Рәсәй" партияһының Достоевский, 73 адресы буйынса урынлашҡан Төбәк йәмәғәт ҡабул итеү бинаһында ла ҡуйылған. Балаларҙың теләге 29 декабргә тиклем ҡабул ителә. Акцияла инвалид, етем һәм һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған 3-17 йәшлек балалар ҡатнаша".

Был проектты тормошҡа ашырыу өсөн Йәмәғәт советы ойоштороla. Уға мәҙәниәт һәм спорт өлкәһенән билдәле шәхестәр инә. Йәмәғәт советының рәйесе - Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Башҡортостан Башлығы кәңәшсеһе Аҫҡар Абдразаҡов.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Баш өйәнәге

❖ Баш өйәнәген иҫкәртеү маҡсатында мәтрүшкә төнәтмәһен ҡулланыу кәңәш ителә. Уны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ киптерелгән үләнгә 300 мл ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт йылы урында төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда яртышар стакан эсергә. Был рәүешле ике ай дауамында дауаланырға.

## Тамаҡ ауыртһа

❖ Тамаҡ ауыртҡанда сало һәм гәрсистән компресс ярҙам итә. Сало киҫәген йоҡаҡ, оҙон итеп киҫеп алырға: ул муйын һәм баҙам биҙҙәрен ҡапларлыҡ булһын. Тоҙланмаған майҙы алыу яҡшы, тоҙланған булһа - сайырға. Дауаны ҡулланырҙан алда сало киҫәге менән компресс һалырға йыйынған урынды майларға. Шунан ҡоро гәрсис онтағына ҡуйы бутҡа барлыҡҡа килгәнсе йылы һыу өҫтәп, сало киҫәгенә һыларға. Шуны гәрсисле яғы менән үңәскә ҡапларға. Өҫтөнә полиэтилен киҫәге ябып, йөн шарф урарға. Компресты 15-20 минут тоторға, көнөнә 2-3 тапҡыр яңынан эшләргә. Дауаланыу һөҙөмтәлерәк булһын өсөн унан һуң эҫе аҡ майлы һөт һәм бал (1 стакан һөткә 1 балғалаҡ бал) йәки йүкә сәскәһе, ромашка һәм бөтнөк менән сәй (1 стакан ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ үлән һалып, һыуығансы төнәтергә) эсергә.

## Сей яралы колит

❖ 2-3 шифалы ромашка сәскәһенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне 2 өлөшкә бүлергә. Көнөнә ике тапҡыр клизма ҡуйырға кәрәк - иртәнсәк оло яраүҙан һуң һәм кискеһен йоҡларҙан ике сәғәт алда. Таҙарынғандан һуң, анусты гөлйемеш майы менән майларға кәрәк. Тәүге клизманан һуң бер аҙ ваҡыт үткәс, 1 стакан юл япрағы һуты менән эшләргә. Шунан һут эсәктәр буйлап таралһын өсөн эс аҫтына яҫтыҡ һалып, иртәнсәккә тиклем шулай ятырға. Йүнәлгәнсе ошо рәүешле дауаланырға, табип ҡушҡандарҙы ла үтәргә кәрәк.

Колитты юл япрағы төнәтмәһе лә яҡшы дауалай. Уны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Ағас өйҙәрҙе үҙенсәлеклерәк итеп биҙәргә теләгәндә тәү сиратта тәҙрә уйымы һәм ишеккә, бигерәк тә алты мөйөшлө өйҙәрҙә ике бүлмә араһындағы ишек семәренә иғтибар бирелгән. Ҡунаҡ бүлмәһен биҙәгәндәр. Шулай ҙа оҙаҡ йылдар башҡорт ауылдары буйлап йөрөгән осорҙа эсенән архитектуралы семәрләнгән өйҙәр сағыштырмаса һирәк осраттыҡ. Әммә шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: 50-60-сы йылдарҙың һәм хатта 70-се йылдарҙың күп кенә "боронғо өйҙәре" XX быуаттың тәүге ун йыллығында совет власы урынлашҡан ауыр йылдарҙа, кулактарҙы юҡҡа сығарыу, артыҡ зауыҡландырып биҙәү һәм "байҙар гәзәте"нә ҡырын ҡараш осоронда төҙөлгән. Декоратив интерьер традициялары кәрәкмәгәнлектән, боронғо кәсептәр менән бергә онотола барған. Ни бары 50-сы йылдарҙан ғына ауылда торлаҡ төҙөлөшө йәнләнеп китқәс, индивидуаль иждасылыҡ яңынан терелә һәм элекке йолаларҙы хәтергә төшөрә башлайҙар.

Оҙаҡ йылдар башҡорт өйҙәрен, бигерәк тә малсылыҡ менән көн күргән районларҙа, тәҙрә уйымдары түбән урынлашыуы айырып торған. Д.П. Никольский килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, Урал арьяғы башҡорттарының өйҙәрендә тәҙрә түпһалары иҙәндән уртаса 12 ҡарыш (ярты метрҙан саҡ ҡына күберәк) бейеклектә эшләнгән һәм урындыҡтан "саҡ ҡына өҫтәрәк булған". Көньяҡ Башҡортостанда ла шулай уҡ эшләнгән. Тәҙрә уйымын тирә-яҡлап тигеҙ йәки еңелсә һырлы яңаҡтар ҡуйылған. Тәҙрә ҡашын (тәҙрә маңлайы йәки түтәлсә лә тиҙәр) биҙәүгә айырыуса иғтибар бүленгән. Уның өҫкө яғы гәҙәттә тигеҙ, түбәгә параллель рәүештә урынлашҡан, ҡырына йәки тар таҡта ҡағылған, ҡайһы саҡта кәрниз рәүешендә эшләнгән. Кәрниз аҫтында фонын уйып, 2-3 ҡат ваҡ ҡына тештәр, ярым түңәрәктәр, киртләс-киртләс пирамида кеүек өсмөйөштәр һыҙаты киткән. Йыш ҡына уйылған һәм ҡалҡып торған семәр бер төрлө булған. Тәҙрә уйымы тура дүртмөйөш булыуға ҡарамаҫтан, ҡашы арка формаһына оҡшатып эшләнгән осраҡта бигерәк зауыҡлы күренгән. Өҫкө кәрниздең аҫ яғы семәрләнеп, арканы уратып торған. 1971 йылда Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылында семәрләнгән ике йәнәш тәҙрәне күрҙек, таҡтаның аҫ яғы ярым түңәрәк уйымдар рәүешендә ҡырҡылған һәм ике ҡатлы арка хасил иткән.



*Һырланған тәҙрә. Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы, 1971 й. Рәссамы Н.В. Александров*

Тәҙрә йөҙлөктәрен эстән биҙәүгә хас ике билдә бар. Гәҙәттә, тотош һырланған, биҙәк ағас фонында күренеп торған. Тештәр, пирамида рәүешендәге һәм башҡа фигуралар аҫҡа "һалынып" торған, шуға тәҙрә ҡыҫҡа пәрҙә йәки суклы семәрле таҫма менән биҙәлгән кеүек тойолған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ХӘТЕРКИТАП*

**Бер нисә йыл элек гәзитебеҙҙә "Мин дә алыпһатар булдым" тип аталған мәҡәлә баҫтырғайным. Шундағы бер эпизод ошолайыраҡ. Улым менән бер туҡталҡалағы павильонды һатып алып, унда аҙыҡ-түлек һата башланыҡ. Күп тә үтмәй, эргәләге электән эшләп торған киоск хужабикәһе - олораҡ ҡына йәштәге бер апай килеп инде. Яртылаш урыҫсалап: "Тауарығыҙҙы минекенән арзаныраҡ хаҡҡа һата башлаһағыҙ, я вас уничтожу!" - тип, беҙҙе иҫкәртеп китте. Беҙ, әлбиттә, ундай-бындай янауҙар ишетеүгә алдан әҙер инек, әммә бының һымаҡ һүҙҙәрҙе башҡаларҙан көтҡәйнек. Бәхеткә, ул мәлдә рэкет хөкөм һөргән осор үтеп киткән булған икән. Ошо һөйләшеүҙән, йомшаҡ итеп әйткәндә, беҙҙең күңел һис кенә лә күтәрелмәне, әммә ниндәй генә тауар һатһаҡ та, хаҡты әлеге күршенеке һымаҡ итеп ҡуйырға мәжбүр инек. Һатып алыусыларҙы йәлеп итеү өсөн бер аҙ осһоҙораҡҡа һатҡанда, килешеп ҡалыр ине лә бит…**

# НИСЕК УЙЛАЙҺЫҒЫҘ:

## хаҡтар ни өсөн арта?




Күпмелер ваҡыттан беҙ күмәртәләп алған базаларҙа ла әле бер, әле икенсе тауарға хаҡтар күтәрелеп тороуына иғтибар иттек. Ундағы хаҡтарға тейешле процент ҡуйғас, әлбиттә, һинең тауарың да ҡиммәтләнеп китә бит инде. Теләһән-теләмәһәң дә. Әлеге база хужалары менән дә һөйләшкеләй торғайным. Тик улар ҙа беҙҙең һымаҡ уҡ хәлдә икән. "Беҙ ҙә арзанға һатыу яҡлы, әммә тауарҙы үҙебеҙ яһап сығармайбыҙ бит, уларҙың хаҡын етештереүселәр өҫтәй, - тигән һымағыраҡ яуап ишетергә тура килә ине. - Етештереүселәргә лә аңларға була. Илдә әленән-әле яғыулыҡ һәм башҡа сеймалдарҙың да хаҡы артҡылап тора..." Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.

Яғыулыҡ, сеймал тигәндәй, әлеге баш һүҙемә яуапты, башлыса, ана шул тирәнәнерәк эҙләргә кәрәктер ул, йәмәғәт. Бөгөнгә көн яғыулыҡтың бер нәмә лә етештереп булмауын һәр кем аңлай. Етештереүселәрҙең хәле лә әлеге күмәртәләп, артабан ваҡлап һатҡан магазиндарҙыҡына оҡшаш булып килеп сыға. Уларға ла кемдәрҙәндер яғыулыҡ, сеймал һатып алырға тура килә. Юҡҡа ғына бөтә донъяла бар яғыулыҡ сығанағы тиерлек булған нефть, газ һымаҡ ер аҫты байлыҡтарын етештереүҙе арттырыу йә кәметеү, уларҙың хаҡын төшөрөү йә күтәреү тураһында халыҡ-ара һөйләшеүҙәр тынмайҙыр. Юғары дәүләт органдары кимәлендә тимер һәм башҡа төр рудаларҙы, ағас-ташты ла йыш ҡына иҫкә алалар.

"Әйберендең хаҡын белгең килһә - баҙарға бар", тигән әйтемде электән үк ишеткеләй торғайным. Хаҡтарҙың тотҡарлыҡһыҙ өҫтәлә барыуын кемдер берәүҙән уны тыя алмауынан ғына күрергә тырышыу ҙа гәҙел булмаҫтыр, әлбиттә. Бөтә донъя күләмендә барған иҡтисади көрсөк мәлендә хатта хөкүмәт башында ултырғандар ҙа тота килеп теге йәки был хаҡты кәметтерергә йөрьәт итмәй. Сөнки улар бындай тыйыуҙың нимәгә килтерәсәген яҡшы белә. Был - баҙар иҡтисады, йәғни, һинең һата торған тауарыңа баҙар үҙе хаҡ ҡуя. Артыҡ ҡыйбат итеп һатырға теләгән әйберендә лә, йә иһә, тиҙ генә һатып ебәреү маҡсаты менән арзанайтырға уйлаған нәмәндә лә үҙең теләгәнсә һата алмауың бар. Мәҡәләмдең башында килтергән ябай ғына миҫалдағы һымағыраҡ, тауар хаҡын арзанайтыуҙы тыйыусылар ҙа мотлаҡ табыласаҡ, тимәксемен....

Икенсенән, һатыу яҡшы барһын өсөн халыҡтың аҡсалы булыуы шарт. Әгәр ҡулланыусыларҙың кеҫә яғы һай булһа, йәғни кешенең һатып алыусанлыҡ һәләте түбән икән, әлбиттә, бер ниндәй етештереүсе йә һатыусы ла тауарға хаҡты күтәрә алмай. Ә инде халыҡҡа эш хаҡын бер аҙ арттырған хәлдә тауар хаҡы ла үҫә башлаясағын беләбеҙ.

Уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдары бөгөнгөләй хәтеремдә. Беҙгә эш хаҡын ай һайын күпләп өҫтәй башлағас, магазиндарҙа элегерәк бер ҡасан да күрмәгән, ҙур дефицит һаналған һәр төрлө әйберҙәр, ашамлыҡтар күренгеләй һәм артабан күбәйә башланы. Хаҡтары, әлбиттә, ҡиммәт кенә. Киләһе айында эш хаҡы тағы арта, ә хаҡтар йәнә күтәрелә. Эйәһе тарафынан сылбыры көн дә бер метрға оҙайтылып та, һөйәк һалынған һауыты ике метрға алыҫайтылған бәйле эт хәлендә ҡалған һымаҡ тоя башланы үҙҙәрен күптәр. Шулай эш хаҡы менән тауар хаҡы уҙыша торғас, күпмелер ваҡыттан ҡасандыр бер нисә тин генә торған икмәктең хаҡы мең һумдан ашып китте. Бәғзе берәү машина һатып алырға тип оҙаҡ йылдар буйы йыйып, һаҡлыҡ кассаһына һалып ҡуйған ете-һигеҙ мең һум аҡсаһына, ысын мәғәнәһендә, бер нисә буханка икмәк кенә һатып ала алды... Ә "тинлек" тигән төшөнсә бөтөнләйгә онотолдо. Берәй нәмәнең хаҡын нисә һум тип түгел, ә нисә мең, тип кенә һораша башланыҡ. Ә инде автомобиль һымағыраҡ берәй ҙурыраҡ әйберҙе тиҫтәләгән миллиондарға һатып ала инек. Уның ҡарауы, эш хаҡтары ла миллиондарға барып етеп, илебеҙҙә бөтәбеҙ ҙә "миллионер" булып киттек. Миллионды "лимон" тип йөрөттөк. Ҡулланыу ыңғайыраҡ булһын типмелер, 1998 йылда Ельцин указы буйынса артыҡ ҙурайып киткән аҡсаларҙың өс ноле алып ташланды һәм, әлеге "лимон" хәҙер

*ХОҠУҠ*

# ҺАТЫП АЛҒАН ФАТИРҘА...

## балиғ булмаған балалар теркәлһә

**Балиғ булмағандар исемендәге фатирҙы һатып алыуҙың бер нисә үҙенсәлеге бар. Был осраҡта һатыу-һатып алыу килешеүенә ҡул ҡуйыу оҙағыраҡ ваҡытты ала.**

РФ Граждандар кодексына ярашлы, 14 йәшкә тиклемгеләр һәм 14 йәштән алып 18-гә тиклемгеләр балиғ булмағандар тип иҫәпләнә. Тәүгеләре исеменән килешеү төҙөү уның ата-әсәһе йәки башҡа законлы вәкиле тарафынан башҡарыла. Икенсе төркөмгә ингәндәр иһә гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеүҙәр төҙөү барышында күберәк хоҡуҡҡа эйә, йәғни үҙаллы килешеү төҙөргә, документтарға ҡул ҡуйырға һәм башҡа процестарҙа ҡатнаша ала. Ләкин быларҙың барыһы ла тик ата-әсәһенең йәки башҡа законлы вәкилдәренең яҙма рөхсәте менән генә башҡарыла.

Фатир бала милке булып иҫәпләнгән осраҡта һатып алыусы өсөн ниндәйҙер кимәлдә хәүефле булһа, һатыусы иңенә иһә өҫтәмә йөкләмәләр һалына. Шуға күрә бындай килешеү төҙөр алдынан бөтә тейешле документтарҙы ентекле тикшереү мотлаҡ.

Һатып алыусы фатирға балиғ булмағандарҙың ниндәй ҙә булһа мөнәсәбәте бармы-юҡмы икәнлеген асыҡлау өсөн Күсемһеҙ милектең берҙәм дәүләт теркәүенән күптән түгел генә алынған күсермәһен, объектты алыу хоҡуғын күрһәткән документтарҙы (һатыу - һатып алыу, бүләк итеү килешеүҙәре һ.б.) тикшерергә тейеш. Күсермәне Күп функциялы үҙәктә йәки Росреестрҙа заказ биреп алырға мөмкин.

Балиғ булмағандар ҡатнашлығындағы килешеүҙе теркәр өсөн ғариза һәм башҡа мотлаҡ ҡағыҙҙар менән бер рәттән, түбәндәге документтар кәрәк буласаҡ:

- баланың законлы вәкилдәренең вәкәләттәрен иҫбатлаусы документ;

***✓ Берәй нәмәнең хаҡы арта икән, шәхсән мин әллә ни бошона һалып бармайым. Бөгөнгө көнөбөҙҙә лә әлеге пандемия, йәйге ҡоролоҡ арҡаһында тауар хаҡтарының артыуын тәбиғи тип һанайым.***

"тыщща" тип йөрөтөлә башланы (Сағыштырыу өсөн: шул аҡсаларҙы "деноминация"ламаған, йәғни үҙгәртмәгән хәлдә, бөгөн эш хаҡтары уртаса утыҙ-ҡырҡ миллион булып, ә бер түтәрәм икмәк 30-50 мең һум тирәһе торор ине).

Бәғзе ололарыбыҙ һағынған совет ҡоролошо дәүерендә (ҡайһы берәүҙәр уны "торғонлоҡ заманы" тип атай) йыш ҡына ҡулланған "планлы экономика" тигән төшөнсәне лә әле күптәребеҙ онотмаған. "Капиталистик ҡоролоштан айырмалы, социалистик илдәргә "инфляция" тигән нәмә бөтөнләйгә хас түгел", тип үттек беҙ политэкономия дәрестәрендә. Әлбиттә, хәҙер ҙә һәр нәмәне планлаштырып эшләйҙәр. Әммә ул саҡта бөтә нәмәгә лә юғары органдар тарафынан ныҡлы хаҡтар ҡуйылып, ана шул аныҡ хаҡ менән генә һаталар ине. Кемдер берәү һатып алып, бәйәһен үҙе баһалап, тауарҙы артабан үҙенсә реалләштерә икән, ундайҙарҙы "спекулянт" (хәҙергесә - алыпһатар) тип атанылар. Спекулянттарҙы яуапҡа тарттыра торған статья ла булманы түгел. Берәй кеше һирәк осрай торған "дефицит" әйберҙе икенсеһендә күреп ҡалһа: "Эспикүләнттән алдыңмы?" - тип һорай торғайны. Ул осор һәр нәмәнең хаҡы "ҡаты" булды. Эйе, ысынлап та, ҡап-ҡаты! Гаражымда совет осоронан һаҡланып ҡалған бер суйын йоҙаҡ ята. Тышына "Цена - 1 р. 60 коп." тип, хатта ҡойоп яҙылған. Хужабикәләр һәр нәмәнең тиерлек бәйәһен яттан белә ине. Минең дә уларҙың бер нисәһе иҫемдә ҡалған: ҡара икмәк - ун алты, ағы - егерме биш тин, ашханала шәкәрһеҙ сәй - бер, ә шәкәрлеһе - өс тин булды...

Бәғзе берәү, хәҙер хөкүмәтебеҙ бына ошолай итеп хаҡтарҙы аныҡлап ҡуя алмаймы ни, тиер. Юҡ, һис кенә лә ҡуя алмай, тип әйтер инем мин. Әгәр, фәлән нәмә - фәләнсә, төгән нәмә - төгәнсә торорға тейеш, тигән "ҡаты" закон сыҡһа, бер нисә көн эсендә магазин кәштәләре, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, әлеге һикһәненсе йылдарҙағы (СССР дәүерендәге) һымаҡ ҡына булып ҡаласаҡ (урыҫ әйтмешләй, "хеть шар тәгәрәт"). Сөнки етештереүселәр, һатыусылар үҙ тауарын "ҡаты" хаҡҡа һатырға риза булмаясаҡ һәм уны магазинға ла сығармаясаҡ. Эйе! Әлеге Союз осоронда кешенең эш хаҡы ла даими кимәлдә, хатта уны үҙ ваҡытында ла түләй торғайнылар бит. Кеҫәлә аҡса ла бар һымаҡ, әммә берәй нәмә һатып алырға кәрәк булһа, магазиндар буйлап сабаһың. Ярай әле, үҙең йәшәгән ҡалала тапһаң... Башҡа өлкәләргә сығып китеп тә эҙләй торғайныҡ. Ә магазинға һатыуға һирәкләштереп булһа ла килгән тауарҙар башта прилавка аҫтына йәшерелә, унан магазин директоры, товаровед, һатыусы һәм уларҙың юғарылағы хужалары араһында бүлгеләп алына. Артҡаны (әгәр ҙә булһа) прилавкаға сығарыла. Халыҡ оҙон сиратҡа теҙелешеп, һатып алырға тырыша (Йәй етһә, мәктәп формаһы, портфель һымаҡ әйберҙәр алыр өсөн, әсәйемдең Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл ҡасабаһына йөрөгәнен хәтерләйем).

Аҙыҡ-түлек менән дә шундай уҡ хәл. Колхоз-совхоздарҙа меңәрләгән баш эре мал көтөп, хатта өйҙәге яңғыҙ һыйырыңдың һөтөн-майын ай һайын хөкүмәткә тапшырып та, кибеттәрҙә ит-һөт продукцияһын һирәк кенә күреүебеҙгә үҙебеҙ аптырай инек. Кәнфит-шоколадтар, сәй ҙә бик һирәк осрай торған тауар булды. Магазинға колбаса килтерһәләр, уға сират әллә ҡайҙа һуҙыла ине. Ә "ливер колбасаһы" бер аҙ йышыраҡ күренгеләне. Шул турала "әсе теллеләр" төрлө көлкөлө лаҡаптар ҙа уйлап сығарып һөйләргә әүәҫләнеп китте. Көләмәстәр менән дә бер аҙ тамаҡ туйып ҡалған һымаҡ була торғайны. "Иван Васильевич меняет профессию" тигән фильмды күрмәгән кеше юҡтыр. Тап шул мәлдә төшөрөлгән кино бит ул. Иван Грозный батшаның һәр төрлө һыйҙан һығылып торған өҫтәлендәге ҙур-ҙур һауыттарға өймәләм итеп тултырылған ҡыҙыл, ҡара ыуылдырыҡҡа әллә ни иғтибар итмәй, бер тәрилкә төбөнә ҡалаҡ башындай ғына итеп һалынған "кабачковая икра" ға ҡарап, кәмитсе актер Крамаровтың ирендәрен ялап-ялап алғанын күреп көлә инек. Оло быуын кешеләре быны ифрат яҡшы аңлай инде. Сөнки беҙ йәш саҡта, ысынлап та, ҡара, ҡыҙыл икра тигән дефицитлы деликатес хаҡында ишетә генә белә инек. Күп кенә аҙыҡ-түлек кибеттәренең кәштәләрен тултырған әлеге ҡабаҡ икраһынан башҡа бер нәмә лә тиерлек булмағанына төрттөрөп төшөрөлгән фильм эпизоды ине ул. Был кинону ҡуйыусы режиссер Леонид Гайдай, заманына күрә, ҡыйыу ғына кеше булған тип уйлау кәрәк. Сөнки илдәге һәр төрлө етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләү СССР-ҙа хупланманы, уларға "тейешле органдар" шунда уҡ иғтибар итә ине. Фильм режиссеры менән дә ошо хаҡта, бәлки, "әңгәмәләшкәндәрҙер" тип уйлайым... Ә әлеге товароведтар, һатыусылар "юғары ҡатлам" кешеләре булды. Бер "Һәнәк" журналында сыҡҡан ошондай һүрәтте хәтерләйем: ит баҙары. Ҡулына ҙур балта тотҡан ныҡ ҡына кәүҙәле ит сабыусыға берәү ихтирамлы итеп (хатта үҙенең башындағы бүреген сисеп): "Ә бит һеҙ карьерағыҙҙы ябай инженер ғына булып башлағайнығыҙ..." - тип өндәшкәнен күреп, бер талай көлөп алғаныбыҙҙы хәтерләйем. Эйе, бына шулай, үҙебеҙҙән үҙебеҙ көлә торғайныҡ.

Хәҙер күҙ алдыбыҙға килтереп ҡарайыҡ: (баштараҡ иҫкә алған туҡһанынсы йылдағы һымаҡ) бөгөнгө көндә лә, әйтәйек, беҙҙең эш хаҡын кинәт кенә ике тапҡырға өҫтәнеләр икән, ти. Магазиндағы тауарҙың хаҡы шул көндә үк икеөс мәртәбәгә артасаҡ! Бына шуның өсөн дә мин элек, хеҙмәт иткән дәүерҙә, эш хаҡы өҫтәүҙәренә лә һис шатланмай торғайным. Был хәлде аңлау өсөн экономист булыу ҙа кәрәкмәйҙер. Үҙ иңебеҙҙә татыныҡ бит инде. Хәҙер хөкүмәтебеҙ шуға күрә лә ошо өлкәлә ифрат һаҡ сәйәсәт алып бара, хаҡтарҙы бер аҙ тотороҡландырыу мәсьәләһен дә ныҡ ҡына уйлап хәл итә. Әленән-әле, нимәнеңдер хаҡын артыҡ ныҡ күбәйтмәҫкә, шул уҡ ваҡытта эш хаҡы күләмен дә самалап ҡына өҫтәргә ҡарар иткеләп, ана шул ике нәмәне бер аҙ теҙгендә торорға тырышыусы етәксе органдарыбыҙға ла еңелдән түгелдер тип уйлайым. Ошо проблемаларҙың эсендә йөрөгәс, уларға юғарынан яҡшыраҡ та күренәләр. Юҡҡа ғына "дума" һынлы урында ултырмай бит улар. Боронғо башҡорт йырында ла "Был түрәлек һиңә бирелгәндер, аҡылдарың камилға күрә..." тип йырлайҙар.

Шулай, бөгөнгө хәлебеҙҙе бынан утыҙ-ҡырҡ йылдар элекке дәүер менән сағыштырып ҡарайым дә, "Аллаға шөкөр", тип һәр саҡ ҡабатлайым. Шәриғәт күҙлегенән сығып ҡарағанда, ошондай риүәйәт бар. Кешеләр Аллаһ илсеһенә килеп, баҙарҙағы финиктың ҡыйбатланыуына зарланған. Ә йөҙөм емешенең хаҡы үҙгәрмәй, элеккесә ҡалыуы тураһында ла әйткәндәр. Финик һатыусыларға тауар хаҡын төшөрөргә бойороуын үтенеп, Бәйғәмбәргә мөрәжәғәт иткәндәр. Әммә Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. килгән халыҡҡа ана шул емештең хаҡын мәжбүри түбәнәйтеү ярамағанлығы тураһында әйткән. Финик алырға хәлдәре етмәгәндәргә уның урынына әлегә йөҙөм менән ҡәнәғәт булып торорға ҡушҡан (сөнки тәбиғәт шаттары боҙолоп китеү йә иһә башҡа төр сәбәп менән финиктың уңмаған осоро булыуы ла мөмкин бит)... Был, баштараҡ иҫкә алып киткән баҙар иҡтисады заманындағыса була инде. Шуға күрә лә, берәй нәмәнең хаҡы арта икән, шәхсән мин әллә ни бошона һалып бармайым. "Шулай булырға тейеш", тип кенә ҡабул итәм, был хәл менән килешергә тырышам. Бөгөнгө көнөбөҙҙә лә әлеге пандемия, йәйге ҡоролоҡ, халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең көсөргәнешлеге арҡаһында тауар хаҡтарының артыуын тәбиғи тип һанайым. Минең фекерем менән ризалашмаусыларҙың да ифрат күп булыуында шигем юҡ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле яҡташтар?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

- 14 йәштән 18-гә тиклемге ғаилә ағзаһының милкен законлы вәкилдәренең ризалығынан тыш үҙаллы һата алыуы тураһындағы документ (балиғ булмағандың тулыһынса хоҡуҡҡа һәләтле (дееспособный) булыуын раҫлаусы суд йәки опека һәм попечителлек буйынса идаралыҡ ҡарары (эмансипированный);
- балиғ булмаған кеше менән никахҡа инеү танытмаһы;
- законлы вәкилдәренең килешеү төҙөүгә яҙма ризалығы;
- 14 йәше тулмағандар өсөн опека һәм попечителлек идаралығының балиғ булмаусының законлы вәкилдәренә милекте һатыуға рөхсәте;
- ошо уҡ идаралыҡтың 14 йәштән 18-гә тиклемге балаға законлы вәкилдәренең уға (балаға) милек менән үҙенә идара итергә рөхсәт биреүе.

Шулай уҡ фатирҙы һатып алғанда Әсәлек капиталының ҡулланылғанлығын дә белешергә кәрәк, сөнки бындай осраҡта фатирҙа мотлаҡ ғаиләнең һәр ағзаһына өлөш бүленергә тейеш. Ҡайһы саҡта фатир хужалары ошо хаҡта онотоп (йәки маҡсатлы рәүештә), өлөш бүлмәйенсә фатирҙы һатыуға ҡуя. Бындай килешеү суд ҡарарына ярашлы ғәмәлдән сығарыла. Фатир һатыусынан мотлаҡ рәүештә Әсәлек капиталының ҡулланылмағанлығын дәлилләүсе документтарҙы - унын ипотекаһы булған банктан йәки Пенсия фондынан белешмә - талап итергә кәрәк.

Милек хужаһы (йәки фатирҙа балаға өлөш бүленгән осраҡта) балиғ булмаған бала ҡатнашлығы булған осраҡта бер килешеүҙе лә опека һәм попечителлек идаралығы һәм нотариус ҡатнашыуынан тыш уҙғара алмай. Фатирҙы һатырға ҡуйыр алдынан баланың вәкилдәре идаралыҡҡа мөрәжәғәт итеп, килешеү төҙөүгә рөхсәт алырға бурыслы. Әлеге документта ике ай эсендә балаға икенсе күсемһеҙ милектә өлөш бүленәсәге тураһында мәғлүмәт теркәлә. Балиғ булмаған баланың икенсе милектә хужа итеп теркәлеүе йәки уға өлөш бүленеүе тураһындағы күсермә идаралыҡҡа килтерелә. Күсермәлә мотлаҡ яңы фатирҙың адресы күрһәтелергә тейеш. Әгәр ҙә ике ай эсендә ошо эш атҡарылмаһа, идаралыҡ булып үткән килешеүҙе тарҡатыу тураһында процесс башлай.

Яңы фатир алған саҡта һатыусының ситтә балалары йәки башҡа вариҫтары булыу мөмкинлеген күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Әйтергә кәрәк, һатыусы хатта үҙе лә был хаҡта белмәҫкә мөмкин. Шуға күрә фатир һатып алыусының хоҡуҡтарын һаҡлау маҡсатында уның менән һатыусы араһында, әгәр ҙә киләсәктә ошондай кешеләр барлыҡҡа килһә, һатыусы улар менән бөтә финанс мәсьәләләрҙе үҙе хәл итәсәген күҙаллаған документ төҙөлә.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

20 февралдә корпус штабы начальнигы, гв. полковнигы И.Д. Сабуров генерал-майор М.М. Шайморатовты 3-сө гв. армияһы штабынан алынған радиограмма менән таныштыра. Унда 1-се гв. механизациялаҥған корпус частарының Иллирия ауылы районына сығыуы хаҡында мәғлүмәт бирелә. Был торлаҡ пункты дошман ҡулындағы Штеровка ауылынан төньяҡ-көнбайыштараҡ 10 саҡрымдар тирәһендә урынлашҡан, ә тап ошо Штеровка ауылы янында, 1943 йылдың 23 февралендә башҡорт дивизияһы яугирҙары үҙҙәренең Донбастағы һуңғы үлемесле алышына инә...

Аҙаҡ беленеүенсә, фронт һыҙығының арғы яғындағы беҙҙең частар ошо ваҡытта бер генә лә саҡрым алға табан үтә алмаған була. Ошо мәғлүмәт, күрәһең, 7-се гв. корпусы командиры, генерал-майор М.Д. Борисовты ла фажиғәле яңылышыуға килтерә, ул дошман оборонаһын үтеп сығыу урынын дөрөҫ билдәләй алмай.

16-сы гв. атлы дивизияһына, корпус командованиеһы ҡарары менән Грабово ауылын ҡалдырып китеп, "Стрюково - Фащевка - Артемовск" маршруты буйынса хәрәкәт итергә, иртәнгә Уткино ауылы районына сығарырға бойорола. Уткино ауылы дошман көстәре ҡулында булған Петровск заводынан (хәҙер Луганск Халыҡ Республикаһының Петровское ҡалаһы) төньяҡ-көнсығышҡа табан 4 саҡрымдар тирәһендә урынлашҡан. Элеккесә, дивизия юлға төнөн ҡуҙғала. Авангардта барған атлыларыбыҙ артынан һуңғы көндәрҙә йәнәш кенә алыштар алып барған 15-се гв. атлы дивизияһы ла ҡуҙғала. 21 февралдә, иртәнге сәғәт 6-ла беҙҙең атлылар Артемов поселогы янына килеп етә. Бында уларға ҡаршы дошмандың "СС" частарына ҡараған танк ротаһы ҡаршы сыға, әммә уларҙы гв. капитаны Сәйфулла Хәбировтың артиллерия дивизионы юҡ итә.

Әммә 21 февралдә көндөҙгө сәғәт 12-лә армия штабынан яңы радиограмма алына: армия частары Городище ауылы йүнәлешендә һөжүмгә күскән. 1-се механизациялаҥған корпус һәм 18-се уҡсы корпус частарына Городище ауылы районына үтеп инергә, ә 14-се гв. уҡсы корпусына Красный Кут ауылы янына сығырға бойороҡ бирелә. Ә һуңғы торлаҡ пункты фронт линияһынан ни барыһы 15 саҡрым тирәһе алыҫлыҡта була. Тик шуныһы: атап үтелгән 3-сө гвардия армияһының бер генә часы ла, бер генә саҡрымға ла алға бармай, немецтарҙың оборонаһы емерелмәй; 7-се гв. корпусының яугирҙары дошман тылында, фронт һыҙығына ни барыһы 5-6 саҡрым ғына территорияла ҡанлы, тынһеҙ алыш алып барған бер мәлдә, 3-сө армияның шөһрәтле хәрби етәкселәре лә, уларға буйһонған часть командирҙары ла ҡыл да ҡыбырлатмай. Фронт һыҙығының икенсе яғынан ярҙамға мохтаж булған, бер снарядһыҙ, башҡа һуғыш припастары ла бөтөп барған рейдтағыларҙың өмөттәре аҡланмай...

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

**✓ *Элек бит татар тигән төшөнсә барлыҡ төрки халыҡтар өсөн уртаҡ атама булған, татарҙар ҡаҙанлы булып йөрөгән. Һуңынан ғына улар татар тигән атамаға йәбешеп алып киттәләр. Ул төшөнсәнең башы - 20-се быуат башы.***

# ТЕЛ БАР — халыҡтың тарихы,

**Башҡортостанда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты инициативаһы менән һәр йылды бер темаға нарыҡлау йолаға әйләнеп бара. Былтыр иғлан ителгән Башҡорт теле йылы әҙмә-әҙлекле генә Башҡорт тарихы йылы менән тоташып китте. Тел менән тарих, белеүебеҙсә, бер-береһенә бәйләнеп килә, сөнки яҙма тел тарихты теркәп ҡалдыра; теркәлгән тарих әҙәбиәтте барлыҡҡа килтерә, әҙәбиәт мәҙәниәткә нигеҙ һала... Һанай китһәң, бындай бәйләнештәрҙе әллә күпме дауам итергә мөмкин. Әммә бөгөн маҡсатыбыҙ саҡ ҡына икенсерәк һәм ошо хаҡта һөйләшеү өсөн редакцияға Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы, филология фәндәре докторы, профессор Гөлфирә АБДУЛЛИНА менән филология фәндәре докторы, профессор, билдәле ғалим Ғиниәт ҠУНАФИНды саҡырҙыҡ.**

**Башҡорт дәүләт университеты - республиканың иң төп, иң мөһим вуздарының береһе һәм тап уға ҙур өмөттәр бағлана. Сикләүҙәр заманында йәшәһәк тә, 14 декабрҙә Башҡорт теле көнөн ҙурлап байрам иттек, олонан ҡупмаһаҡ та, һәр башҡорт өсөн был көн рухиәт байрамына әйләнде. Һөйләшеүҙе БДУ-ның Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетының башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса ниндәй эштәр алып барыуына һәм ниндәй сараларҙы тормошҡа ашырыуына бер аҙ байҡау яһауҙан башлайыҡ...**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Факультетыбыҙ традицияларға бай һәм ул, ысынлап та, башҡорт теленең, башҡорт әҙәбиәтенең, башҡорт мәҙәниәтенең мәркәзе. Элек-электән ул Башҡортостан өсөн генә түгел, Рәсәйҙең төрлө субъекттары өсөн милли кадрҙар әҙерләү үҙәге булып тора. Факультеттың маҡсаты - булған традицияларҙы һаҡлап ҡалып, әҙерәк кенә яңыса үҫеш тәҡдим итеү, сөнки заман башҡа - заң башҡа, беҙгә уҡырға килеүсе студенттарҙың хәҙер үҙаңы ла икенсе, донъяға ҡарашы ла башҡаса. Улар беҙҙең кеүек, беҙ теләгәнсә уйламай, һәм ни тиклем генә рухлы булһалар ҙа, башҡорт телен, башҡорт әҙәбиәтен, башҡорт мәҙәниәтен һәм рухиәтен һ.б. үҫтереү юлын икенсе төрлө күҙ алдына килтерә. Һәм беҙ ошо үҫеш алымдарына студенттар күҙлегенән ҡарап, уларса фекерләргә тырышабыҙ.

Элек, факультетты Ғиниәт Сафиулла улы етәкләгән ваҡытта меңгә яҡын студент уҡыған, әммә ул саҡта бюджет урындары күп булған һәм факультетҡа бөтәһе лә маҡсатлы, аңлы рәүештә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булам, тип килгән. Ә хәҙерге абитуриенттарҙы тик башҡорт теле һәм әҙәбиәте менән генә ылыҡтырыуы ауыр. Шунең өсөн һуңғы йылдарҙа беҙ башҡорт теленең донъяуи кимәлдә тотҡан урынын дөрөҫ билдәләү йүнәлешендә эш алып барабыҙ, студенттарға телебеҙҙең, әҙәбиәтебеҙҙең башҡа телдәрҙән һәм әҙәбиәттәрҙән бер ҙә генә кәм түгел, айырым осраҡтарҙа хатта уларға ҡарағанда нығыраҡ үҫешкән дә икәнен һеңдерергә тырышабыҙ. Шул маҡсаттан башҡорт теле шәреҡ илдәре телдәре менән сағыштырып өйрәнелә лә инде. Хәҙер балаларҙың ҡытай, япон, корей теле тип иҫтәре китә, хатта үҙаллы өйрәнәләр. Беҙ, донъя ағышынан ситтә ҡалмайынса, уларҙың теләктәрен иҫәпкә алып, бына шундайыраҡ йүнәлештә эш алып барабыҙ.

**Ғиниәт Сафиулла улы:** Ҡытай стенаһы менән генә бикләнеп ултырып, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап, берәү ҙә алға китә алмай. Күрешеү-аралашыуҙан барыбер ниндәйҙер өлгөләр, тәжрибә алаһың, өйрәнәһең, башҡалар һинән өйрәнә. Шунең һымаҡ, бағланыш - бәйләнештә. Бына был Гөлфирә Риф ҡыҙы әйткән йүнәлештәрҙе теге заманда уҡ башлап, өс ярым кешенән торған штат менән көнсығыш телдәрен өйрәнеү кафедраһын асырға батырсылыҡ иткәйнек, шөкөр, ул хәҙер ҡеүәтле кафедра булып китте.

Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында тыраша-тыраша башҡорт һәм сит телдәр кафедраһын да асып ебәргәйнек. Ул ваҡытта студенттарҙың 40 проценты ауылдан килгән башҡорт балалары ине. Ә ниңә башҡорт балалары инглиз һәм немец телдәрен рус теле аша ғына үҙләштереп ултырырға тейеш әле, тигән һорау ҡуйылып, был телдәрҙе туранан-тура үҙләштереү методикаһын индерергә тигән маҡсат менән асылған кафедра ине ул. Үкенескә күрә, ундай методика менән эшләүсе кадрҙарыбыҙ булмай сыҡты. Шуға ла был методиканы ныҡлы ерлеккә ҡуя алманыҡ. Әлеге ваҡытта факультетыбыҙҙа алты көнсығыш теле, барлығы 10 тел өйрәнелә, теге йәки был телде ни тиклем етеҙерәк үҙләштереү алымдары эҙләнә. Бөгөн башҡорт телен сит тел итеп өйрәнеү методикаһы өҫтөндә лә эш алып барыла. Беҙгә бөгөн дә кадрҙар кәрәк. Юғары кимәлдәге белгестәр күп нәмәне хәл итә.

Беҙҙең факультетҡа мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнгән балалар ғына килмәй. Шул уҡ журналистика, шул уҡ Көнсығышты өйрәнеү бүлегенә сығышы менән башҡорт милләтле булған, ләкин төрлө сәбәптән үҙенең әсә телен, мәҙәниәтен, рухиәтен әле ҡабул итеп бөтмәгән, аңлап етмәгән, әммә барыбер ҙә ниндәйҙер кимәлдә рух талабы - ҡан хәтере этәргес булып, көнсығыш телдәрен өйрәнергә килгәндәр бар. Шуға, ошо мәлдәрҙе лә күҙ уңынан ысҡындырып ебәрмәй, уларға, теләгәндәренә, ликбез кимәлендә, факультатив кимәлендә булһа ла туған телдә ниндәйҙер саралар үткәрергә кәрәктер, тип уйлайым. Мейе ҡапҡасын асып ҡына үҙең теләгәнде һалып булмай, ләкин үҙенден идеяларыңды унын яғынан яуап булырҙай, уртаҡ тел табырҙай рәүештә еткереү кәрәк. Тел факторы - үҙе консерватив күренеш, уны берәү ҙә инҡар итмәй. Ул тиҙ генә үҙгәрә, бер туҡтауһыҙ революция яһай торған өлкә түгел. Ул - милләтте милләт иткән төшөнсә. Тел бар икән, халыҡтың тарихы бар, тарихы бар икән - теле бар, рухиәте бар. Шунһыҙ - тел, тарих, ер, рухиәт - юҡ. Тик бер фекеремде һәр ваҡыт әйтә киләм: аҡыллы консерватизм, йәғни традициялар ерлегендә үҫешергә тырышыу кәрәк.

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Эйе, факультетыбыҙ, элеккесә, башҡорт милләтле балалар тупланған ғына урын түгел. Бер яҡтан, быға хафаланырға ла урын барҙыр - 800 студент белем ала, шуның 200-ҙән саҡ ҡына ашыуы башҡорт балалары, йәғни улар башҡорт бүлегендә уҡый. Ҡалған 600-ө - ул 10-дан артыҡ сит ил вәкилдәре (Ирандан, Ҡытайҙан, Төркиә, Конго, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Тажикстан һ.б.) һәм 20-нән артыҡ Рәсәй субъекттарынан килгән төрлө милләт вәкилдәре. Хатта ҡара тәнлеләр ҙә бар араларында. Икенсе яҡтан, шатланырға ла кәрәк - беҙҙең факультетты һайлап, белеп, аңлап килгәндәр бит, тимәк, унын ниндәйҙер абруйы бар. Тағы ла бер мәл бар: әлеге лә баяғы шәрҡиәт һәм африканистика бүлегенә беҙҙең башҡорт балалары инә алмай ҙа ҡала, сөнки ҡабул итеү балдары юғары, ә беҙҙең балы юғары булған башҡорт балалары финанс, иҡтисад, хоҡуҡ, нефть, авиация, медицина юғары уҡыу йорттарын һайлай. Улар милли факультетты бик һанлап бармай.

**Ғиниәт Сафиулла улы:** Ә шулай ҙа берҙәм дәүләт имтиханы балдары тигән ҙур күрһәткес бар. Факультетыбыҙҙың имиджы тураһында һүҙ алып барғанда, беҙҙең факультетҡа ошо һөҙөмтә буйынса ҡабул ителгәндәр күрһәткесе хоҡуҡ институты һәм иҡтисад-финанстан һуң иң юғарыһы.

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Башҡорт филологияһы факультеты булғас, дәрестәребеҙ тик башҡорт телендә генә бара икән, тип уйлаусылар ҙа бар. Был хата фекер. Беҙ - универсаль, күп милләтле, әммә шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең ерлегебеҙҙе, асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалған факультет. Бөтә сараларыбыҙ башҡорт телендә башлана. Ғөмүмән, беҙҙә ҡытай теле - ҡытайса, корей теле - корейса, башҡорт теле башҡортса уҡытыла. Бер үк ваҡытта Шәрҡиәт һәм башҡорт теле ғилеме кафедраһы мөдире булараҡ, ултырыштарҙы рус телендә алып барһам да, һәр ваҡыт аралаштырып башҡортса ла телмәр тотам. Һәм беҙҙең башҡа милләттән булған уҡытыусыларға ла, ошо кафедрала эшләйһегеҙ икән, ҡайһы бер ҡатмарлы булмаған һүҙҙәрҙе башҡортса әйтергә өйрәнегеҙ, тип иплэп кенә һеңдерәбеҙ. Ошо уҡ ҡағиҙә студенттарыбыҙға ла еткерелә. Улар үҙ илдәренә, үҙ төбәктәренә ҡайтып, бына башҡорттар үҙҙәренең телен, халҡын ихтирам итә, шул уҡ ваҡытта башҡа халыҡтарҙы ла кәмһетмәй, тип һөйләй икән - беҙҙең маҡсат шул.

**Бөгөн барлыҡ донъя цифрлаштырыуға йөҙ бора. Хатта, әгәр интернетта юҡ икән, һинең телең юҡ, тип тә ебәрәләр. Был йәһәттән эштәр нисек ҡуйылған?**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Был, ысынлап та, шулай. Беҙ ҙә факультеттың уҡытыусыларын да, студенттарын да ошондай проекттарға йәлеп итергә тырышабыҙ. Мәҫәлән, БДУ уҡытыусылары әле башҡорт теленең дактиль алфавитын эшләне. Уны төҙөүҙә беҙҙең факультет та ҡатнашты. Башҡорт теленең ым-ишара телен булдырҙыҡ. Ул Рәсәй Федерацияһында милли телдәр араһында иң беренсе төҙөлгән дактиль алфавит һәм ым-ишара теле. Башҡа бер телдә лә юҡ. Был да бит үҫештең бер баҫҡысын күрһәтә.

Унан һуң, факультет уҡытыусылары тарафынан башҡорт теленең тарихи корпусы төҙөлдө. Башҡортостан Башлығы грантына лайыҡ булып, төньяҡ-көнбайыш райондарҙы арҡырынан-буйға йөрөп сыҡтыҡ. Һәм, әлбиттә, беҙҙең бик бай фонд тупланды. Хәҙер диалектологик база, диалектологик корпус эшләрлек материалдар һәм фольклор базаһы бар. Электән йыйылған материалдарҙы төньяҡ-көнбайыш буйынса байытыу - ул инде баһалап бөткөһөҙ ҡиммәткә эйә, тип иҫәпләйем.

Шунан һуң факультет нигеҙендә диссертация советы тергеҙелде. Унда ла тапалған темаларҙы түгел, донъяуи кимәлдә ылыҡтырғыс булған темаларҙы тәҡдим итергә тырышабыҙ. Сөнки, мәҫәлән, эҙләү системаһында кемдер "башҡорт теле" тип йыя икән, башҡорт теле буйынса яҡланған диссертацияларыбыҙ табылырға һәм улар башҡаларға ниндәйҙер өлгө булырға тейеш тип уйлайбыҙ. Аспиранттарыбыҙ был фекерҙе ҡеүәтләй.

Һуңғы осорҙа беҙҙең байтаҡ ҡына монографиялар донъя күрә һәм беҙ инглиз телле журналдарҙа башҡорт теле буйынса мәҡәләләр баҫтырабыҙ. 2015 йылда башҡорт теле ғилеме буйынса мин Scopus-та баҫылған иң тәүге мәҡәлә авторымын. Ул ваҡытта скептик ҡараштағы булыусылар күп булды, йәнәһе, минең мәҡәләне унда кем ала. Ул мәҡәләләр бит башҡорт тел ғилеме буйынса яҙылһа ла, барыһы ла инглиз теленә тәржемә ителә. Тимәк, мәҡәлә башындағы һәм мәҡәлә эсендәге башҡорт һүҙе аша башҡа милләт вәкилдәре беҙҙе инглиз телендә мәҡәлә баҫтырырлыҡ милләт булараҡ ҡабул итә. Ошо хаҡта ла уйларға тейешбеҙ.

**Был һорау, башҡорт әҙәбиәтен оҙаҡ йылдар энәһенән-ебенәсә ентекләп өйрәнгән әҙәбиәт белгесе булараҡ, Ғиниәт Сафиулла улы, һеҙгә: һуңғы ваҡытта шуға йыш иғтибар итәбеҙ - беҙҙең телселәрҙең хеҙмәтендә лә, фәнни даирәлә лә иҫке башҡорт теле тигән термин юҡ, әммә шул уҡ ваҡытта барлыҡ төрки халыҡтар өсөн уртаҡ булған иҫке төрки теле бик уңышлы ғына иҫке татар теленә әүерелгән. Ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп китегеҙ әле.**

**Ғиниәт Сафиулла улы:** Телселәр беләләр тип уйлайым: Салауат Юлаевтың яҙмалары буйынса кандидатлыҡ, докторлыҡ эштәре яҙған Хисамова, Рамазанова иптәштәребеҙ был документтарҙың телен иҫке татар теле тип ҡуллана башлаған. Улар бөгөн дә шул юлды ҡыуа. Ул ваҡытта иҫке татар теле тигән төшөнсәнең еҫе лә, еле лә, эҙе лә булмаған. Бында елдең ҡайҙан иҫкәнен төшөнөүе ауыр түгел. Петр Беренсе лә үҙенең күрһәтмәһендә, Көнсығышҡа үтеп инеү өсөн рәсми тел кәрәк, тигәндә иҫке яҙма төрки телен күҙ уңында тотҡан, асылда, бер ниндәй ҙә татарҙарҙы түгел. Ғалимдарыбыҙ Биксурин, Кукляшев, Ивановтар баҫма китаптар сығара башлаған - татар теле башҡорт теле менән бергә ана шул яҙма телдең бер һөйләше итеп кенә ҡаралған. Элек бит татар тигән төшөнсә барлыҡ төрки халыҡтар өсөн уртаҡ атама булған, татарҙар ҡаҙанлы булып йөрөгән. Һуңынан ғына улар татар тигән атамаға йәбешеп алып китәләр. Бына тора ул төшөнсәнең башы - 20-се быуат башына яҡынлаған ерҙә генә. Үпкәләмәһендәр, уға тиклем юҡ ул иҫке татар теле. Туҡайҙың шиғырҙарын төп нөсхәһендә уҡып ҡарағыҙ - ҡайҙа унда иҫке татар теле? Бабичты алып ҡарағыҙ. Ул яҙмаларҙы, иҫке татар



✓ ***Дәреслектәрҙе үҙе мәктәптә бер көн дә дәрес уҡытмаған кеше эшләргә тейеш түгел. Булһын унда өс автор: ғалим, Мәғарифты үҫтереү институтында эшләгән белгес һәм мәктәптә уҡытып йөрөгән практик-уҡытыусы.***

# икән,

## рухиәте лә бар

телендә яҙылған, тип нисек атарға мөмкин?

Социаль-иҡтисади йәһәттән ҡарағанда, ысынлап та, күршеләр алда барған һәм бара. Ҡайҙа иҡтисад үҫә, унда мөмкинлектәр киңәйә бара. Тәүге типографиялар, университет Ҡазанда барлыҡҡа килә. Был да үҙ ролен уйнай. Шул тирәлә яҙма мәҙәниәт, бигерәк тә гуманитар өлкәлә, ныҡ үҫешә һәм шулар йоғонто яһамай тип әйтеп булмай. Татарҙар араһында шәхси типографиялар асырға тырышыусылар күбәйеп китә һәм асалар ҙа. Ул ваҡыт өсөн типография, ҡағыҙ баҫмалар - заманына күрә мәҙәни революция. Кемдең ҡулында - шуның ауыҙында. Ул типографияларҙа Ғәли Соҡоройҙоң да, Бабичтың да яҙмаларын баҫмаҫҡа тырышыуҙар була. Йәғни, әҫәренде ҡағыҙға баҫтырыу өсөн нәшриәтсенең талабы үтәлергә тейеш. Ташҡа бер баҫылған артабан шулай дауам итеп ала ла китә. Шунан һуң, уҡыуҙы алайыҡ. Уҡыу бит барыбер татар телендә алып барылмаған. Утыҙ Имәниҙең шиғырҙары йә булмаһа Тажетдин Ялсығолдоң әҫәрҙәре, яҙмалары мәҙрәсәләрҙә уҡытылған икән, кем уны иҫке татар телендә яҙылған тип әйтә ала?

Иҫке татар теле тигән төшөнсә - ул нонсенс. Уның идеологтары 19-сы быуаттың һуңғы сирегендәге идеологтар, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев замандаштары. Өмөтбаевтың яҙғандарын төп нөсхәлә уҡып ҡарағыҙ, ул шул уҡ ғәрәпле, фарсылы һәм сығатайлы иҫке төрки теле бит. Әлбиттә, тағы бер нескәлек бар: ғәрәп графикаһында беҙҙең өндәр күберәк. Нишләп ғәрәп графикаһында яҙылған иҫке төрки телен иҫке татар теле тиеүселәр был хаҡта өндәшмәй, нишләп ҡысҡырмай?

**Ошо иҫке төрки теле темаһын икенсе темаға бәйләп ебәрәйек: быйыл һеҙҙең факультет төньяҡ-көнбайыш райондар буйлап диалектологик һәм фольклор экспедицияһында булды, тимәк, киләсәктә тағы бер хәҡиҡәтте тергеҙеү буйынса ла эштәр алып барырға нигеҙ булдырыла, тип әйтергә мөмкин...**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Ул беҙҙең генә түгел, ошо территорияларҙа йәшәгән ерле халыҡтың теләге. Һеҙ беҙҙе нисек ҡаршы алғандарын күрһәгеҙ! Сөнки уҙған быуаттың 70-се йылдарынан алып уларға ғалимдарыбыҙ килмәгән, экспедициялар булмаған. Был, моғайын, финанс мәсьәләләренә бәйлелер.

Экспедицияны иң элек Асҡын, Ҡариҙел районларынан башланыҡ. Унда кешенең милләтен һорап торорға ла кәрәкмәй: халыҡтың ихласлығынан һәм нисек ҡаршы алыуҙарынан уҡ күренеп тора. Һәр береһе: "Ҡайҙа булдығыҙ һеҙ быға са? Тарихты, риүәйәттәрҙе, легендаларҙы белгән инәй-бабайҙарыбыҙ үлеп бөттө бит..." - тип үкенес белдерҙе. Бер ни тиклем үҙебеҙҙе ғәйепле тойҙоҡ хатта. Башҡортостан Башлығының грантын отмаһаҡ, беҙ ҙә бара алмаҫ инек, сөнки экспедиция барҙың да ҡайттың түгел, ауылдар буйлап йөрөп, ҡуна ятып эшләргә кәрәк. Маҡсатыбыҙ фольклор һәм диалектологик материал йыйыу булһа ла, беҙ бер юлы этнографик материалдар ҙа тупланыҡ. Ни өсөн тигәндә, ҡайҙа барма, шунда сигелгән таҫтамалдар, боронғо әйберҙәр һаҡланған. Шул тиклем бай яҙма, аудио, видеоматериал тупланыҡ. Әлбиттә, ваҡыт яғы сикле ине. Һуңынан һәр район буйынса барлыҡ материалды бергә туплап, видеолар, фотолар менән бергә айырым флешкаға, дискыға яҙҙырып тапшырҙыҡ. Райондарҙың мөмкинлеге булһа, улар үҙҙәре был материалды баҫтырып сығарып тарата ала.

**Бөгөн бөтөн нәмә аҡсаға ҡоролған. Ҡайһы яҡтан алып ҡараһаҡ та, башҡорт теленең яҙмышы аҡсаға бәйле һәм шундай һорау бирге килә: Башҡортостанда башҡорт телен тейешле кимәлдә һаҡлау, үҫтереү өсөн етерлек аҡса бүленәме, дәүләт тарафынан иғтибар етерлекме? Эйе, гранттар бирелә, әммә улар ғына етерлек түгел һәм грант бер йыл булһа, икенсе йылына булмауы ла ихтимал. Ә тел мәсьәләһен бер йыл иғтибар үҙәгенә ҡуйып, икенсе йылына онотоу ярамай...**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Бында матди яҡ, ысынлап та, ҙур урында тора. Беҙ - университет, һәм беҙ Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем биреү министрлығына буйһонабыҙ. Финанс ярҙамын һораған хәлдә лә, юридик сәбәптәр арҡаһында министрлыҡ үҙе аҡса бүлмәйәсәк, ә Башҡортостан Хөкүмәте лә, министрлыҡтар ҙа туранан-тура ярҙам күрһәтә алмай.

Беҙҙә Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың телдәрен һаҡлау программаһы бар. Уны финанслау йәһәтенән бик күп бәхәстәр булды. Татарстан Республикаһы программаһының финанс күләме менән сағыштырҙылар. Әлбиттә, айырма иҫ китмәле. Бөгөн финанслау булмайынса, ҡоро рух менән генә, ҡоро дәрт менән генә, ҡоро грант менән генә бер нәмә лә эшләп булмай. Бына әле грант отҡас, факультеттағы бөтә эшебеҙҙе ташлап, экспедицияға сығып киттек. Бындай экспедицияларҙың файҙаһы бар яҡлап та ҙур, әммә финанс кәрәк. Беләһегеҙме, беҙ йөрөгән райондарҙа күпме материал йыйылмай ҡалды. Коронавирус ваҡыты бит, барыһына ла инеп тә, күреп тә булманы. Ә шулай ҙа шундай ҙур эш башҡарылды. Финанслау булһа, беҙ диалектологик һәм фольклор корпусын төҙөргә әҙербеҙ. Әле фондтарға ғариза биреп ҡараныҡ, Мәскәүҙән кире яуап алдыҡ. Әлбиттә, башҡорт теле Рәсәй кимәлендә түгел, үҙебеҙҙең республикала ғына фундаменталь була ала. Башҡортостан Хөкүмәте был мәсьәләне фундаменталь тип ҡабул итеп, шуға финанслау бүлергә тейеш. Финанслау булһа, беҙҙең ҡулдан эш килә.

**Ғиниәт Сафиулла улы:** Хәҙер беҙ капитализмдың үҙендә йәшәйбеҙ, үкенескә күрә, аҙым һайын аҡса кәрәк. Гөлфирә Риф ҡыҙы әйтеп китеүенсә, геүләп-геүләп дәүләт программаһы ҡабул ителде. Күршеләрҙә телде һаҡлау һәм үҫтереүгә - 1 миллиард 400 миллион, Башҡортостанда 350 миллион бүленә. Тағы шуны өҫтәп әйтер инем: башҡорттар араһында меценаттар юҡ. Күршеләребеҙҙә улар бар. Ә беҙҙекеләр ҡайҙа икән? Булһалар ҙа, аҡсалы милләттәштәргә



милли аң, рухиәт етешмәйме икән?

**Башҡорт - ниндәй генә власть булыуға ҡарамаҫтан, борон-борондан башҡорт булып килгән һәм үҙен милләт булараҡ та, рухиәтенең бер өлөшө булараҡ телен дә һаҡлап ҡалған. Уның бына ошо үҙен һаҡлауы ҡайҙан килә һәм киләсәктә лә башҡорт булып һаҡланыр, телен һаҡлап ҡалыр һәм үҫтерер мөмкинлеге, ҡеүәте бармы?**

**Ғиниәт Сафиулла улы:** Тарихта халыҡтар нисек юғала? Ярай, хәҙер "Без башҡортлар" хәрәкәте бар, үҙен татар тип йөрөүселәр тамырҙарын табып, башҡорт икәнлеген асыҡлай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бәйләнештәр ниндәйҙер мәлдә өҙөлөп тә китә. Алманы киҫкәндән һуң йәбештереп ҡуйырға тырышыуҙан ғына бер нәмә лә килеп сыҡмай. Йәбештереп була, әммә йөйө ҡала. Бында тағы бер ҡабатларға мәжбүрмен - бәйләнештәрҙе өҙмәҫ өсөн башҡорт телендә уҡытыу кәрәк. Оло быуын үҙенең башҡортлоғон таныр ул, ә уларҙың ейән-ейәнсәрҙәре төкөрөп тә бирмәүе мөмкин. Уҡытыуҙы киҫә һуғып әҙәби телгә генә күсереү ҙә кәрәкмәй, уларҙы үҙҙәренең диалектын иҫәпкә алып уҡыта башларға кәрәк. Бының өсөн кадрҙарҙы үҙҙәренең яғынан әҙерләү зарур.

**2022-2032 йылдарҙы БМО-ның Генераль ассамблеяһы Туған телдәрҙең ун йыллығы тип иғлан итте. Был бер йыл ғына түгел, ә тотош 10 йыл. Тимәк, ошо ваҡытта күп эштәрҙе эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырырға мөмкин буласаҡ. Ошо осорҙа һеҙҙең факультет ниндәй эштәр эшләргә планлаштыра?**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Мәғлүм булыуынса, федераль исемлеккә ингән олимпиадалар теҙмәһе раҫланды һәм уға башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиада ла индерелде. Ошо олимпиада еңеүселәре юғары уҡыу йорттарына йә имтиханһыҙ ҡабул ителә, йә берҙәм дәүләт имтиханы 100 балға тиңләштерелә. Был ҙур эш. Тимәк, олимпиадала яҡшы белем күрһәтә алған балалар юғары уҡыу йорттарына башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән һынауһыҙ ҡабул ителәсәк.

Анонс рәүешендә әйтәм: былдәле генә Мәскәү проектында ҡатнашып, башҡа туғыҙ тел менән бер рәттән, башҡорт әкиәттәрен урыҫ теленә тәржемә рәүешендә китапсыҡ сығарҙыҡ. Ул асыҡ, матур, сағыу һүрәттәр менән эшләнгән һәм балалар баҡсаларына тәғәйенләнгән. Ошо көндәрҙә был китапты ҡулға алырбыҙ тип уйлайым.

Башҡорт телен белеү кимәлен тикшереү ҡағыҙәләрен эшләнек. Әйтәйек, кемдер дәүләт хеҙмәтенә эшкә урынлашырға теләй, йә булмаһа, юғары уҡыу йорттарының профилле - филология бүлегенә уҡырға инергә йыйына икән, ул башҡорт телен белергә тейеш. Был ситтән килгәндәргә лә ҡағыла. Ошо тест ярҙамында беҙ уның башҡорт телен белеү кимәлен билдәләй аласаҡбыҙ. Рәсәйгә сит илдәрҙән килеүселәр рус теле буйынса тест тапшыра бит, шуның кеүек була инде.

Артабан иһә республика кимәлендә сертификациялау үҙәге булдырырға уйлайбыҙ. Беҙ бының менән, Башҡортостанда йәшәргә, эшләргә теләйһең икән, телде белергә тейешһең, тигәнде күрһәтергә тырышабыҙ. Һәм тағы башҡорт телен халыҡ-ара кимәлдә сертификациялауҙы планлаштырабыҙ. Республика етәкселеге менән ул хаҡта һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Был телебеҙҙең ЮНЕСКО кимәлендә сит илдәрҙә лә ҡабул ителеүенә юл асасаҡ. Әле беҙгә БР Мәғариф һәм фән министрлығы полилингваль мәктәптәр өсөн башҡорт теле буйынса күп телле һүҙлектәр төҙөү буйынса мөрәжәғәт итте. Әлегә башҡорт-рус-инглиз, һуңынан көнсығыш телдәре буйынса ла һүҙлектәр төҙөүҙе дауам итербеҙ тип уйлайым. Шулай уҡ предметтарҙың күпмелер өлөшөн төбәк компоненты ҡулланып уҡытыу өсөн дәреслектәргә аңлатмалар, методик ҡулланмалар һорайҙар, һәм беҙ был тәңгәлдә лә эш алып барабыҙ.

Республикала башҡорт теле буйынса милли корпус төҙөлмәгән. Ул ҙур минус. Айырым өлкәләр, әйтәйек, шиғриәт, проза буйынса айырым корпустар бар. Тарих буйынса корпус бар. Фольклор, диалектология буйынса эшләһәк, шунан килеп сыға ла инде ул дөйөм корпус.

Хәҙер дәреслектәр эшләүгә лә үҙебеҙ тотонорға ниәт бар, республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы шундай тәҡдим менән сыҡты. Дәреслектәрҙе үҙе мәктәптә бер көн дә дәрес уҡытмаған кеше эшләргә тейеш түгел. Булһын унда өс автор: ғалим, Мәғарифты үҫтереү институтында эшләгән белгес һәм ошо эштәрҙе ғәмәлгә ашырған, мәктәптә әлеге ваҡытта уҡытып йөрөгән, балаларҙың тын алышын тойған практик-уҡытыусы.

Цифрлаштырыу эшмәкәрлегә дауам итәсәк. Беҙҙең коллективтың мобиль ҡушымталар өҫтөндә лә әүҙем эшләгәнен беләһегеҙ. Хәҙер барлыҡ башҡарған эштәрҙе йәштәр үҙ мәнфәғәтендә киң ҡулланһын һәм көндәлек тормошта файҙалана алһын өсөн цифрлаштырыуға ултырасаҡбыҙ.

**Башҡорт теле корпусы тураһында күптән һөйләйҙәр, әммә йөк һаман урынында. Ул эшләп китһен өсөн унда күпме һүҙ булырға тейеш: миллионмы, миллиардмы...**

**Гөлфирә Риф ҡыҙы:** Башлап ебәрер өсөн 1 миллион һүҙ кәрәк, тиҙәр. Минеңсә, был бик аҙ. Беҙҙең бит телебеҙ бик бай, миллиондан башлап, уны тулыландырып торорға кәрәк. Унда шул уҡ диалект һүҙҙәре лә урын алырға тейеш тип уйлайым. Корпус әҙәби һүҙҙәрҙең генә йыйылмаһы түгел бит. Телебеҙҙең академик һүҙлеге төҙөлгән, башҡа терминологик, лингвистик йүнәлештәге тар ҡулланылышлы башҡа һүҙлектәр бар - шуларҙың барыһының да электрон варианттары һаҡланған, шуларҙы ғына бер системаға һалған ваҡытта ла әллә нисә миллион һүҙебеҙ буласаҡ.

Хөкүмәттә барлыҡ базаларҙы берләштереү хаҡында идея бар. Улар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтынан бик ҙур эштәр көтә ине, был эштәр нисек барғанын әлегә белмәйем. Әммә шундай маҡсат ҡуйылған. Йәғни һәр кем үҙендә булған базаны йәлләмәй генә бер ҡаҙанға һалырға тейеш. Быны тормошҡа ашырыу өсөн ниндәйҙер бер берәмек, аңлы, рухлы һәм эшен намыҫлы үтәгән структура булырға тейеш...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тел һәм әҙәбиәт һәр саҡ йәнәш килә, тине Ғиниәт Сәфиулла улы әңгәмә барышында һәм ҡапыл әңгәмәнең төп асылын асып биргән образ күҙ алдына баҫты. Мәҡәләнең йомғаҡлау өлөшө тап шулай яҙылырға тейеш! Аҡыллыға - ишараны Мостай Кәримдең ошо юлдарында табабыҙ: "...Бер ваҡыт мин, әле үҫмер сағымда, ҡояш батып барғанда Сағылтау башында йөрөгәнемдә, саҡма таш өйөмөнә тап булдым. Кемдер мунса ташына тип йыйғандыр, күрәһең, уларҙы. Ни эшләптер, эйелеп, өйөмдәге бер йоморо ташты алдым. Ул йып-йылы ине. Мин быға ғәжәпләндем. Икенселәрен дә тотоп ҡараным. Улары ла йылы ине. Ситтәрәк таралып ятҡан бер нисә ташты өйөмгә алып һалайым тип ҡул һондом. Былары һап-һалҡын ине. Тимәк, күмәк булғанда таштар ҙа, ҡояштан алған йылыны үҙ-ара бүлешеп, оҙаҡ заман һыуынмайҙар икән..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

ИЖАДХАНА

**Театр - беҙҙең көндәлек, ығы-зығылы йәшәйештән алыҫ, ләкин шул уҡ ваҡытта ҡәҙимге тормоштоң сағылышы ла. Ул саф тойғолар, асыҡ хистәр иле, мөхәббәт һәм нәфрәттең йәнәш йәшәүе, яҡшының һәр саҡ яманды еңеүе. Уйҙарға һалыусы орлоҡ сәсеүсе лә, ниндәйҙер һорауҙарға яуаптар табырға ярҙам итеүсе лә ул - театр. Быларҙың барыһын да тамашасы күңеленә алып барып еткереүҙең төп бурысы театр актеры иңенә төшә. Бөгөнгө әңгәмәсем - М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Радмир АБДУЛЛИН менән уның актерлыҡ донъяһына байҡау яһайбыҙ.**

# СӘХНӘ ОБРАЗДАРЫМДЫ...

## өйөмә алып ҡайтмайым



**➔ Радмир, һинең сәнғәткә килеүең, театр артисы һөнәрен һайлауың маҡсатлы рәүештә булмаған, шикелле. Әйҙә, баштан һөйләп үт әле.**

- Ысынлап та, театр донъяһына килеп эләгеүем осраҡлы булды. Мин Ейәнсура районы Үтәғол ауылында тыуып үҫтем. Мәктәпте тамамлағас, Стәрлетамаҡ педагогия институтының тарих факультетына имтихандар тапшырҙым, ләкин балл етмәү сәбәпле, уҡырға инә алманым. Икенсе йыл тағы ла бәхетемде һынап ҡарау маҡсаты менән әҙерлек курсына ҡалырға хәл иттем. Ләкин яҙмыштың миңә ҡарата үҙ ҡарары булған, күрәһең. Һөҙөмтәлә, мин фәнгә бөтөнләй ҡағылышы булмаған һөнәргә - актерлыҡҡа уҡып сыҡтым.

Мәктәп йылдарында йыр, музыка менән мауыҡһам да, ғүмерлек һөнәрем нәҡ сәнғәт өлкәһенә ҡағылышлы булыр тип һис ҡасан уйлағаным булманы. Стәрлетамаҡта әҙерлек курстары мәсьәләһен хәл итеп йөрөгән саҡта танышымды осраттым. Ул миңә Өфө сәнғәт институтының театр һәм вокал факультеттарына абитуриенттар йыйыуҙары тураһында әйткәйне, унын менән бергә баш ҡалаға сыҡ та кит мин. Вокал булегенә, бәхетиһән, музыкаль училищенан һуң ғына алалар икән, минең ундай белем юҡ бит инде, уҡырға алманылар. Шунан дуҫҡа иптәш булып, театр факультетына барып, имихандар тапшырғайным, индем дә киттем. Быны ошо рәүешле, уйламағанда-нитмәгәндә Өфөлә ҡалып, актер һөнәрен үҙләштерә башланым. Шул ваҡытта миндә ниндәйҙер осҡон күреп, сәхнәгә сығып уйнай алырымды һиҙемләп-тойоп мине уҡырға алған комиссия ағзаларына, мине уҡытҡан уҡытыусыларыма рәхмәтем ҙур.

**➔ Студент йылдары тураһында күңелеңдә ниндәй хәтирәләр һаҡлана?**

- Студент саҡ балалыҡ менән хушлашып, йәшлеккә аяҡ баҫҡан мәл, ысынлап та, матур һәм күркәм осор. Яңы таныштар, ҙаллылыҡ, рухи әҙләнеү ваҡыты, кеше ғүмеренең мөһим бер өлөшө. Минең талип тормошом да матур, иҫтәлектәргә бай булды. Нәҡ ошонда "сәнғәт", "ижад", "театр" төшөнсәләре күңелемә үтеп инеп ғүмерлеккә шунда тамырланды. Башҡорт сәнғәтенең, театр өлкәһенең олуғ шәхестәрендә уҡыу бәхете, пьесалар өйрәнеү, ролдәр өҫтөндә эшләү, төнгә тиклем ҡалып репетициялар яһау, йырмоң, курсташтар менән бергә төрлө ҡыҙыҡтар ойоштороу, ҡыуыу бәхетстәр - быларҙың барыһы ла әле булһын күңелем түрендә. Гөлсөм Бикбулатова, Рәмзиә Мәҡсүтова, Илгизә Ғилманова, Фирғәт Ғарипов, Руслан Ғәлимов, Илнур Лоҡманов, Илмир Иҙрисов, Нияз Закиров һәм башҡа талантлы ыҡҙар һәм егеттәр менән курсташ булыу бәхете тейҙе. Беҙ дуҫ, татыу йәшәнек, бергәләп спектаклдәр әҙерләнек, театр факультеты сәхнәһендә уйнаныҡ, ғөмүмән алғанда, студент сағым шул тиклем күңелле, үҙенсәлекле, хәтерҙә ҡалырлыҡ булды.

**➔ Актерҙар менән интервьюларҙың һәр береһендә тиерлек уларҙың сәхнәлә уйнау, актер булыу хыялы бала саҡтан уҡ яралғанлығы һәм ошо хыялды ысынбарлыҡ итеү өсөн оҙон юлдар үтеүҙәре тураһында уҡыйбыҙ. Ә һинең бөтөнләй киреһенсә. Уйламаған ерҙән театр факультеты студенты булып киткәнһең. Үҙеңде буласаҡ актер итеп ҡабул итеү процесы нисек барҙы?**

- Эйе, Стәрлетамаҡта пландар селпәрәмә килгәнлектән генә тормош юлы мине Өфөгә, сәнғәт институтына - театр факультетына - алып килде. Шуға күрәләр, ижади мөхиткә ылығып китеү, театр факультетында уҡый башлау тәүҙә миңә ауыр бирелде. Көндөң беренсе яртыһында дөйөм гуманитар фәндәр уҡыттылар, уныһы әллә ни ауырлыҡ тыуҙырманы. Ә төштән һуң актерлыҡ оҫталығы, сәхнә теле һәм башҡа ошондай фәкәт сәхнә, театрға бәйле булған дәрестәргә ылығып китеү, үҙемде ошо өлкәлә күрергә өйрәнеү ҡыйын булды. Ниндәйҙер сәхнәне уйнау өсөн партнерҙар таба алмай ыҙалана торған инем. Оялыуым да булғандыр инде.

Яңы йылдан һуң ғына ҡыҙыҡһыныу уянып, дәрестәргә ихлас йөрөй башланым. Шулай булһа ла, театр сәхнәһендә уйнарға тигән көслө теләккә ҡарағанда, "Уҡырға ингәс, уҡыр кәрәк" тигән фекер мине институтта тота ине. Тик 3 курсҡа еткәс кенә үҙемде буласаҡ актер итеп ҡабул иттем. Үҙемдә ышаныс барлыҡҡа килде, сәхнәлә уйнау теләге уянды, театр, сәнғәт минең артабанғы яҙмышым икәнен аңланым.

Институт сәхнәһендә тамашасылар алдында спектаклдәр ҡуйыу, унан М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында эпизодик ролдәрҙә сыға башлау мине "уятып" ебәргәндәй булды. Һин сәхнәлә, залда - тамашасы, ул һинең матур, мәғәнәле тамаша көтә. Уның ышанысын аҡлау өсөн бөтә тырышлыҡты һалырға, бар һәләтеңде биреп уйнарға кәрәк. Спектакль тулыһынса үҙенә йөлоп ала ла, шаршау ябылғансы һин Радмир түгел, ә әҫәр персонажы булараҡ йәшәйһең. Был бит бик шәп! Тимәк, мин алда әллә күпме образды кәүҙәләндерә, әҫәр персонаждарына "йән өрә" алам. Быларҙың барыһын да аңлау өсөн миңә ваҡыт кәрәк булды, ләкин бөгөнгөм, үҙемдең һөнәрем менән бәхетлемен.

**➔ М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында эшләүеңә 17 йыл. Ошо ваҡыт эсендә ниндәй ролдәр өҫтөндә эшләнең, уларҙы нисек ҡылыҡһырлайһың?**

- Режиссерҙар мине күберәген комик ролдәргә, тип әйтәймме икән, тәғәйенләй. Ололарға тәғәйенләнгән спектаклдәрҙә шуҡ персонаждарҙы, балалар тураһындағы әҫәрҙәрҙә хулиган малайҙарҙы һәм ошондай тәү ҡарашҡа кире геройҙарҙы күберәк һынландырам. Был образдар аша ниндәйҙер спектаклдә кешегә хас булған кире яҡтар күрһәтелә, ә икенсе әҫәрҙә иһә улар донъяны ғәҙәти аң менән аңлап булмаған, уның гүзәл яҡтарын тулыраҡ асырға ярҙам итеүсе булып сығыш яһай. Ғөмүмән, ниндәй әҫәрҙә лә бындай образдар бәләкәй урын биләмәй һәм пьесаның төп асылын, бөтә мәғәнәһен аңлатыуҙа мөһим роль уйнай.

Ыңғай геройҙан тамашасы ниндәйҙер уйланмаған аҙым эшләр тип көтмәй, уның персонажы ҡатнашлығындағы бөтә тамаша ла тик яҡшылыҡҡа ҡоролған һәм уның менән бәйле тарих һәр ваҡыт тиерлек бәхетле тамамланыуына шик юҡ. Ул һәр ваҡыт герой, маҡтауға лайыҡ персонаж. Ә пьесалағы шуҡ персонаждан, кире образдан аныҡ ҡына нимә көтөргә лә белеп булмай. Улар һәр ваҡыт төрлө ҡиәфәттә, йә хәйләкәр, йә артыҡ ышаныусан, фекер һығылмалығы менән айырылып тора, йәғни уға төрлө сүрәткә инергә һәм тамашасыны ошоға ышандырырға кәрәк.

Комик образда ла драматизм һәм хатта трагизм ятырға мөмкин. Барыһы ла авторҙың нимә әйтергә һәм уны ни рәүешле тамашасыға еткереүенә бәйле. Мәҫәлән, Александр Вампиловтың "Өлкән ул" пьесаһы сәхнәгә комедия булараҡ сығарыла. Ләкин ундағы ғаилә, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре, хистәр донъяһы, персонаждарҙың үҙҙәрен асыу һәм ҡабул итеүендә драматизм ятмаймы ни?

**➔ Роль өҫтөндә нисек эшләйһең?**

- Һәр ролдә лә ихлас күңел менән ҡабул итеп алам, тарихи әҫәр булһа, уны төплө итеп өйрәнәм. Мин уйнаясаҡ персонаж ысынбарлыҡта ниндәй кеше булған, ниндәй эштәр башҡарған, ул йәшәгән осорҙа ниндәй хәл-ваҡиғалар булған - барыһы ла ҡыҙыҡһындыра, халыҡтың дөйөм йәшәйеше тураһында ла уҡыйым. Ғөмүмән, роль өҫтөндә эшләгәндә авторҙың уны нисегерәк күреүен күҙ алдына баҫтырырға, уның нәҡ ошо персонаждан сәхнәлә нимә көткәнен аңларға тырышам. Ролдә бар яҡлап үҫтерәм, уның дөйөм спектакль эсендә нисегерәк буласағын уйлайым, һуңҙаремдә ниндәй тонда һәм интонацияла, ҡиәфәттә әйтәсегемде ҡат-ҡат ҡабатлайым.

Роль - сәхнәгә сығып китапҡа яҙылған репликаны ғына әйтеү түгел, ә уйнаған персонаждың теге йәки был мәлдә ни өсөн нәҡ ошо аҙымға барыуын, ошо һүҙҙе әйтеүен, үҙен тотошон аңларға тырышыу һәм тамашасыға аңлата алыуҙалыр, тип уйлайым. Эшемә яуаплы ҡарайым, сөнки спектаклдәге һәр образ уның уңышлы булыу-булмауына йоғонто яһай. Тамашасы өсөн сәхнәлә бәләкәй роль юҡ, ул һәр геройҙың һүҙен, ым-хәрәкәтен ишетә һәм күрә. Мин, актер булараҡ, әҫәр авторы әйтергә һәм күрһәтергә теләгән мәғәнәне тулы кимәлдә уға алып барып еткерергә тейешмен. Әгәр ҙә ошоға өлгәшә алһам, тимәк, актерлыҡ һөнәрен юҡҡа үҙләштермәгәнмен, үҙ урынымдамын. Эшемдә илкеһалҡылыҡты өнәмәйем.

**➔ Спектакль көндө үҙеңде сәхнәгә нисек әҙерләйһең?**

- Бындай көндә мин коллегаларым менән әллә ни аралашып бармайым, тулыһынса роль тураһында уйлайым, персонажымды баштан аҙағына тиклем тағы ла бер күҙ алдына баҫтырам, һүҙҙәремдә ҡабатлайым. Сәхнә артында бөтөнләй башҡа нәмә тураһында һөйләшеп торол, сәхнәгә сыҡһам, ролгә инеп китеүе минең өсөн ауыр. Шуға күрә ситтәрәк булам, әңгәмәләргә әллә ни ҡушылмайым. Сәхнәлә барған ваҡиғаларға әҙер булып килеп сыҡһам, үҙем уйнамаған ваҡытта ла коллегаларымдың уйынын күҙәтеп ултырһам, ваҡиғалар барышына ылығып китеүе ауыр түгел.

**➔ "Ҡайһы бер актерҙарҙың иң ҙур бәхетһеҙлеге - образдарынан сыға алмайынса, уны үҙенең тормошона индереүе, үҙе һәм образы араһындағы сикте юғалтыуы", тигән фекер уҡығайным. Ошо хаҡта нимә әйтерһең?**

- Был бәхетһеҙлек мине урап үтте. Мин бер ҡасан да образдарҙан сыға алмайынса йөрөгәнем юҡ, уларҙы өйгә алып ҡайтмайым, көндәлек тормошома ҡыҫылдырмайым. Әлбиттә, образ өҫтөндә эшләгәндә, әҙерләнгәндә мин театрҙан ситтә лә уның хаҡында уйларға, өйҙә уйнап ҡарарға мөмкинмен, ләкин әҫәрҙәге образдың шәхсән минең тормошома үтеп инерәнә юл ҡуймайым. Был тәңгәлдә миндә фанатизм юҡ һәм был дөрөҫтөр, тип уйлайым. Һәр нәмә үҙ урынында булырға тейеш, театрҙа - эш, өйҙә - ҡәҙимге тормош. Яҡындарыңды эшкә бәйле сикләүҙәргә ҡуйыу, уларҙың йәшәйешенә ҡамасаулауы - ул эгоизм. Быға юл ҡуйыу мәғәнәһеҙлек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙ һөнәрен яратҡан, эшенән ҙур ҡәнәғәтлек кисергән кешеләр менән йәнле әңгәмәләр килеп сыға. Бөгөнгө һөйләшеү нәҡ шундайҙарҙан булды. Театр донъяһына маҡсатлы рәүештә килмәһә лә, нәҡ театр сәхнәһендә үҙ урынын тапҡан актер Радмир Абдуллинды алда тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ ролдәр, уңышлы образдар көтөүенә шик юҡ.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Бер әбей баҙарға һатынырға барған. Тауары шул ауылса инде: йомортҡа, һөт һәм бер әтәс. "Курица почем?", тип һораһалар: "Это не курица, курица дома. Это муж курицы", - тигән була, ти.***



АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# ЮМОР ЙОМРО ТАШ ТҮГЕЛ, ЮЛДА ЯТМАЙ

**Һәр матбуғат йөҙөн рубрикалары биҙәй. "Киске Өфө" гәзитендә улар бихисап. Ҡайһы бер рубрикалар шундуҡ уҡыусыларын табып, йәшәп китә, ҡайһылары һүнеп тә ҡуя. Йәшәгәндәре илдәге кәйеф-торошто сағылдыра, тотороҡлоҡҡа алып килә. Һәр береһенең үҙенә күрә рейтингы бар. "Алдар менән Ерәнсә ҡоро" лакмус ҡағыҙы һымаҡ илдәге торошҡа шул хәтлем һиҙгер: йә әүҙемләшә, йә һүлпәнәйә. Ни булһа ла йәшәй, йәшәргә тырыша. Нәҡ беҙҙең һымаҡ. Үҙ йырҙарын башҡарыусы шағир-йырсы Александр Розенбаум бер сығышында: "Мин һуңғы ваҡытта ниндәйҙер юғары көстәрҙең барлығына ышана башланым. Бына, анекдоттарҙы алығыҙ, уларҙы берәү ҙә махсус яҙмай, ә улар әллә ҡайҙан барлыҡҡа килә һәм йәшәй", - тип әйтеп ҡуйҙы. Юморһыҙ йәшәп булмай был тормошта. Йәшәп булалыр, ләкин ул йәшәүме икән? Ниндәй генә ауыр ваҡыттар булмаһын, шуҡлығын, шаянлығын юғалтмаған әҙәм балалары. Үтә етди кешеләр ауырыраҡ ҡабул итә шаярыуҙы, хатта аҡылһыҙлыҡҡа һанағандар ҙа юҡ түгел. "Юморһыҙлыҡ аҡылһыҙлыҡҡа тура пропорциональ", ти торғайны билдәле психолог мәрхүм Вадим ағай Сафин. Йәшәйек! Һүҙ Әбйәлил районы Әсхәл Әхмәт-Хужа исемендәге "Йәйғор" әҙәби берекмәһе ағзаларына.**

**Сәфинә Әхмәтова:** Беҙҙең ауылдан бер ағай кәләше менән городҡа (әбйәлилдәр Магнитогорскиҙы шулай атай) картуф һатырға барған. Һатып алыусылар аҙ булғас, ир кеше ҡала буйлап йөрөп килергә булған. Килеүенә байтаҡ кеше сиратҡа баҫҡан. Ҡатыны эргәһенә үтәйем тиһә, мәрйәләр быны үткәрмәй, ти.

- Эй, черномазый, куда лезешь? Оптом покупаете, потом нам же втридорога продаете! - тип әрләп ташлағандар хатта.

- Мин её муж, - тип әйтеп тә ҡараған, үткәрмәгәндәр барыбер.

Ҡарағусҡыл йөҙлө башҡорт булһаң, шулай ҙа була икән.

**Исмәғзәм Исмәғилев:** Ике башҡорт әлеге лә баяғы Мәғнит урамы буйлап китеп барһа, ҡаршыларына бер негр осраған. Тау институтында уҡыған студент булғандыр, күрәһең. Береһе иҡенсеһенә әйтә ти:

- Ҡара әле, ҡара, һинән дә ҡарараҡ кеше бар икән дә!

- Үҙенде бел, - тигән була ти икенсеһе, - уның алдында беҙ ҡарһылыу һымаҡ.

**Айһылыу Хәсәнова:** Кәртүк тигәндән, беҙҙә бер кеше Ҡәстәрәм ағайҙан кәртүк алып, баҙарға киткән. Мәрйәләр картуфты улай-былай әйләндергеләп ҡарайҙар, әммә алырға ашыҡмайҙар икән.

- Ҡайҙан алып килдең, кемдән? - тип төбәшәләр, ти.

Был: "Кастарамский", - тигән икән, "О-о, Кострома", - тип сират баҫып алып бөткәндәр.

**Исмәғзәм Исмәғилев:** Вьетнамдар цирк эргәһендәге баҙарҙа үҙ тауарҙарын һата башлаған мәл. Урыҫса бөтөнләй белмәйҙәр, ни һораһаң да, "тысяся-тысяся", тип тик торалар. Берәү юрамал: "Давай, за полторы тысяча куплю", - ти. Тегеләр: "Нее, тысяся-тысяся", - тиҙәр.

**Сәфинә Әхмәтова:** Бер әбей баҙарға һатынырға барған. Тауары шул ауылса инде: йомортка, һөт һәм бер әтәс. "Курица почем?", тип һораһалар: "Это не курица, курица дома. Это муж курицы", - тигән була, ти.

**Мөнирә Кирәева:** Урыҫтар Ирәндеккә күтәрелергә юлды белмәй, көтөүсенән һорашҡандар. Теге ҡапыл ғына нисек аңлатырға белмәй, "Ирандык надо подымать", тигән дә ҡуйған.

**Мөнирә Кирәева:** 75-се ҡоролоҡ йылында колхозсылар Украинаға барып, һалам бәйләнеләр. Таҡһырҙан бер ағайҙы бригадир итеп ебәргәндәр. Ашханала, сиратҡа баҫып, үҙ кешеләренә ашарға үҙе алып бирә икән. Аш ебәреп тороусы хохлушка: "Скільки вам?", - тип һорай икән. Аптырауға ҡалған ағай: "Мне без кильки", - тип яуаплаған. Ҡатын тағы һораған. Яуап шул уҡ. Сират ҙур, тиҙерәк ебәрер кәрәк. "Ну, скильки вам?", - тип тауыш күтәргәс, ағай: "Ладно, айда, с килькой", тип яуаплаған.

**Айһылыу Хәсәнова:** Ун йыл элек урыҫтарҙан ҡоҙоҡ ҡаҙҙырабыҙ. Төшкә тауыҡ бешерҙем. Урыҫ тотто ла: "Это гусь?"- тип һораны. "Нет, птица", - тинем. "Курица - не птица", тигәнде ишеткән бар бит инде. Хәҙер "Не гусь, а птица", тигәнем лаҡап булып ҡалды.



**Сәфинә Хәкимова:** Бер ир Аҫҡарҙағы магазинға ингән. Һатыусыһы мәрйә икән. Сираты еткәс, ҡаушап ҡалған ир: "Курить купили?" - тип һораған. Мәрйә асыуланып: "Что надо?" - тигәс, был тағы: "Курить купили?" - тип һораған. Сираттағылар шаулаша башлағас, ир оялып сығып киткән. "Курить дайте", - тип һорарға онотҡан, бахыр.

**Исмәғзәм Исмәғилев:** Студент саҡта мунсанан ҡайтып килгәндәр башҡаларҙан айырылып тора бит ул. Бер төркөмдәш ҡыҙыбыҙ беҙҙе күрҙе лә, ихласлап тороп, "С легким паром!" тип әйтергә уйланы, шикелле. Ләкин бөтөнләй икенсе төрлө килде лә сыҡты. "Счастливого пути!" тине ул.

**Әлиә Ихсанова:** Үтәгәндеке бер ағай өй һалырға шабашкаға барған. Араларында урыҫтар ҙа бар икән. Бер урыҫ бынан: "Где топор?" - тип һораған. Был ағайҙың урыҫсаһы һүлпәнерәк булғандыр инде. "Топор на өй арты лежит", - тип яуаплаған. Хәҙер үҙе мәрхүм, лаҡабы ҡалды.

**Айһылыу Хәсәнова:** Әлеге шул ир-аттар бер татарға мунса күтәрәләр икән. Балтаһы төшөп киткәс, бер ир татарға: "Апа (әбйәлилсә бабай була), балтаны алып бир әле", - тигән. Татар: "Мин сиңа апа булырға, бичә тип беләсеңме мине", - тип асыуланып киткән.

**Мөнирә Кирәева:** Күршебеҙҙең Мәғниттән килгән улының ҙур сумкаһын ҡәйнәмдәр алып торған. Улы ҡалаһына ҡайтыр булғас, күрше әбей: "Ислам Мәғниткә китә, теге сумканы алырға килдем", - тип ингән. Аңын-тоңон аңламаған ҡәйнәм маз булып эҙләргә керешкән. Эш ҡабалан булғас, күршеһе лә уға ҡушылған һәм эҙләгән әйберҙе урындыҡ аҫтынан һөйрәп сығарған. "Мына, мынауында ултырған да баһа", - тей икән. Ҡәйнәм: "Ah-ah, уны дауна бәлеш ауыҙ сумка тип әйтмәй ней, дауна алып бирер инем", - тигән.

**Исмәғзәм Исмәғилев:** Ике әзмәүер бер әбейгә мунса бурарға ялланған. Һөйләшеп-килешеп, аванс аҡсаһын алғас, береһе икенсеһенә әйтә ти: "Һин сығып һыҙа тор, мин артыңдан сығып сабырмын". Әбей сығыуға елдәр иҫкән был икәүҙән. Яҡшы аңлағандар бер-береһен.

**Сафинә Әхмәтова:** Бер әбей бәләкәй улы менән попуткаға ултырған. Шоферы урыҫ икән. Оҙон юлда шым барыуҙы хуш күрмәй, урыҫ һүҙ башламаҡсы булып: "Это твой сын?" - тип һораған. Әбей: "Да, твой, твой сын", - тигән дә ҡуйған. Урыҫ башҡа һүҙ ҡушмаған.

**Мөнирә Кирәева:** Буранғолдоҡолар Ғәйзулла менән Әгзәм йомош менән Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл ҡасабаһына барғандар. Бер урыҫҡа төнгөләккә фатирға төшкәндәр. Быларҙың бәләкәй ҡыҙы сәсрәп ауырып ята икән. Башҡорттарҙың ҡайһы берҙәренең өшкөрөм-төкөрөмгә шәп икәнен белгән урыҫ ярҙам һораған. Ундай һәләте булмаһа ла, Ғәйзулла Әгзәмгә кәртәнән һарыҡ буғы индерергә ҡушҡан. Ҡара төстәге йоморсаҡтарҙы теҙеп һалып, ауыҙ эсенән нимәләр уҡып, төкөрөнә башлаған был. Эргәһендә ултырған Әгзәм көләүҙән көскә тыйылып ултыра, ти. Ғәйзулла: "Һарыҡ ине, буҡ ине, һарыҡ ине буҡ ине. Һиңә әйтәм, тик ултыр. Хәҙер атыу эште боҙаң", - тип һамаҡлай, ти. Бер йоморсаҡты һыуға иҙеп, ҡыҙға эсереп тә ебәргән. Иртәгеһен юлдарын ары дауам иткәндәр. Ҡайтышлай урыҫҡа тағы һуғылғандар. Ауырыған ҡыҙ йүнәлеп, йән-фарман йүгереп йөрөй, ти. Урыҫ ҡыҙын "йүнәлткән" Ғәйзулланы ҡайҙа ултыртып, нимә бирергә белмәй ҡыуанып, быларҙы һыйлап ҡайтарған.

**Мөнирә Кирәева:** Элек, ысынлап та, ауыл ерендә урыҫсаны бөтөнләй белмәнеләр. Урыҫтар менән артыҡ аралашып та барманылар. Минең ағайҙың ике ҡатындан биш балаһы булды, икеһе - Копейскиҙан, өсөһө - Таштүйҙән. Балалары үҙ-ара татыу булды. Юлы төшһә, ағай айырылған еңгәйгә һуғылып, уларҙы ла ҡуша тейәп алып ҡайта торғайны. Бергә ҡунаҡлашып, дошманлашмай йәшәнеләр. Элек бит кешеләр араһында шулай татыулыҡ була торғайны. Әсәйем мәрхүмә теге биш баланы бергә теҙеп ултыртып, уларҙың бер ата балалары икәнен үҙенсә аңлатҡан. "Адин атес, два мать" булған уның аңлатмаһы. Ул ваҡытта әсәйемә ни бары 63 кенә йәш булған. Балалар йәшен һорағас: "Шишнадцать три", - тип яуаплаған.

**Фәнүзә Биктимерова:** Элек район һабантуйында бик күп йырсыларҙы тау битенә теҙеп, ҙур хор ойошторалар ине. Бер мәктәптә йыйыштырыусы булып эшләгән гәләмәт матур тауышлы апайҙы ла йырсылар исемлегенә индергәндәр. Тауышы матур, әммә ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булған апайһыҙ. Репетиция ваҡытында хорға өйрәтеүсе "Сопрано!" ти ҙә ҡыҫҡыра икән. Ҡыҫҡырыуы була, теге апай йән-яғына ҡаранып, кемделер эҙләй икән. Ҡабат бармаған ул хорға. Аҙаҡ сәбәбен һорағандар икән, "Ҡалайтып унда оялмай барайым. Унда заврono тиклем заврono йырлай алманы, хорҙы боҙоп тик торҙо. Өйрәтеүсе уға әллә нисә тапҡыр зәмисүние яһаны. Уның урынына үҙем ер булып оялып торҙом", - тип яуаплаған.

**Әлфирә Нуритдинова:** Һәр ауылда төрлө мажараларға тарып йөрөгән кеше була. Беҙҙә лә бар ине шундай бер инәй. Уның бер мәҙәген яҙайым әле. Урыҫ ауылында була был хәл. Инәй бер туҡтауһыҙ сиҡҡалай икән. Хәлен урыҫтарға үҙенсә аңлатҡан. Ауыҙын күрһәтеп: "Тут кричит, нәвирнә, Әхмиәнкә придет". Баҡтиһән, был ваҡытта улы әрмелә булған. Йәнәһе, шуны аңлатҡан: тамағы ҡыҫҡырғас, улы ҡайтып килә, ҡустәнәс һорай тамағы.

**Сәфинә Әхмәтова:** Әскесе ирҙең Васька исемле бесәйе булған. Уныһы әсеп ултырған балға ҡолап төшкән. Ир бесәйҙе тарта һалып алып борғослап һыға башлаған. "Давай, Васька, давай еще одну капельку", - тип һамаҡлай, ти, етмәһә.

**Марсель Хамматов:** Элек Тупаҡ ауылында урыҫтар ҙа йәшәгән. Вася тигәндәре бигерәк ыҙарауай булған. Өмәләп кәбән ҡойғанда, башта торған дүрт ир был ташлаған бесәндә көскә тағатып тапап өлгөрәләр икән. Береһе өҫтән ҡыҫҡыра, ти: "Вася, не заваливай!" Хәҙер ауылда шул һүҙҙәр һаман да лаҡап булып йөрөй.

**Салауат Әминев:** Дауыт ауылынан Хәдис ағай (хәҙер мәрхүм инде, йәндәре йәннәттә булһын!) әрменән ҡайтҡас, Ҡырҡты тауына ҡарап, атаһына: "Что за гора появилась?" - тип һораған.

**Әлфирә Нуритдинова:** Бер инәй иртә тороп, бесән күбәләргә китә. Етәүҙе күбәләй ҙә, ҡайтҡас, һигеҙ күбә эшләнем, тип хәбәр һала. Иртән барғас, ҡайҙа бер күбәң, тип һорайҙар бынан. Иң ҙур күбәгә күрһәтеп, бына, күбә эсендә күбә, күрмәйһегеҙме әллә, тип яуаплаған. Хәҙер беҙҙә ҙур күбәне күбә эсендә күбә, тиҙәр.

**Салауат Әминев:** Элек әсәйем мәрхүмә Мәғниттәге бер магазинға инһә, эшләпә кейгән, ирендәре буялған һатыусы мыҡырайып баҫып тора икән. Әсәйем нимәләр һораған бынан. Теге өндәшмәгәс, "Һаңғырау, дә?" тип ҡулынан тартҡан икән, теге ҡолаған да киткән. Тауышҡа килеп сыҡҡан ысын һатыусы: "Бабушка, поставь манекен на место!" - тип һүкрана, ти. Икенсе магазинға инһә, тағы буяулы иренле, эшләпә кейгән берәү тора, ти. Әсәйем тегенең янына барып, ирендәрен бүлтәйтеп, "Пууув!", тип еңенән тартҡан икән, тегенең күҙҙәре шарҙай булған. "Чего надо, апайка?" тип һорай, ти, етмәһә.

**Әлиә Ихсанова:** Беҙҙә элек бер малай (хәҙер ул апа мәрхүм инде) атаһы менән Мәғниткә барып ҡайтҡас, аптырап һөйләй, ти: "Урыҫтарҙың бәләкәй генә балалары ла русса һөйләшә белә икән дә!"

**Марсель Хамматов:** Ауылдағы бер әбей городтағы трамвайға ингәс, дарҡылдатҡансы һауаны боҙған да ҡуйған. "Че, бабушка воздух портишь?" - тигән берәү. "Почему портишь, я воздух пускаю", - тигән әбей.

**Айһылыу Хәсәнова:** Дүрт йәшлек сағында бәләкәй улымды Үтәгәнгә алып барҙым. Өләсәһе менән шул тиклем килештеләр. Эй сутылдаштылар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Бер мөҡсай ҡустәнәстәр, бүләктәр, уйынсыҡтар тейәп ҡайтты малайым. Ҡайтҡас, "Үтәгән өләсәй беҙгә нисек туған?" - тип һорай. "Ул минең әсәйем, мин һинең әсәң, шулай туған", - тип яуап бирҙем. "Бындағы өләсәй нисек туған?" - тип, һаман төбәшә. "Ул атаңдың әсәһе", - тим. Уйланып ултырҙы ла: "Ә атайым миңә нисек туған?" - тип һораманһыны.

**Исмәғзәм Исмәғилев:** Бер бала әсәһенән: "Әсәй, һинең үҙеңдең әсәң бар бит. Ниңә әсәң менән йәшәмәй, беҙҙең менән йәшәйһең?" - тип һорай, ти.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ауыл халҡынан аҡса йыйып, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына обелискыны ла районда беренсе булып Еңеүҙең 70 йыллығына беҙ, Родина-Ватан ауылында астыҡ. Аҙаҡ беҙҙең башланғысҡа районда бик күптәр эйәрҙе.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЗИРӘКТӘР ГЕНӘ УҢЫШЛЫМЫ?

■ Зирәклек күрһәткән кеше башҡаларҙың күҙе алдында бик уңышлы кеше булып күренә, ти Квинсленд университеты ғалимдары. Тикшенереүҙәрҙә ҡатнашыусылар араһында эрудицияны тикшереүсе һорауҙарға тиҙ яуап биреүселәрҙе шулай баһалағандар. Һөҙөмтәләр аҡыл ҡеүәһенә, кешенең шәхси сифаттарына бөтөнләй бәйле булмай сыҡҡан. Ғалим Уильям фон Гиппель билдәләүенсә, социаль интеллект - ул белгәнен практикала ҡуллана алған кеше. Быны кешеләр йыш ҡына лидер булып тора һәм уларҙы тап зирәклеге берләштерә лә инде.

■ Төнгөләккә ашарға ярамай, тип раҫлай бөтөн табиптар ҙа. Тик ваҡытында ашап өлгөрмәгәндәргә нимә эшләргә һуң? Төнгә ҡарай ашауҙы зыянһыҙ итергә тырышығыҙ, тип кәңәш бирә диетологтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ас көйөнсә йоҡларға ятыуҙың шулай уҡ кире яҡтары бар. Ғалимдар күптән раҫлаған, тамағы туҡ кеше яҡшыраҡ йоҡлай. Йоҡлар алдынан нимәләр ҡапҡылап алыу ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә. Шулай итеп, һуңға ҡалған киске аш майһыҙландырылған йогурттан тора ала. Унда диетик протеин бар, ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫасаҡ, иң яҡшыһы - йогурт артыҡ татлы булмаһын. Эремсек тә сәләмәт туклаыу рационынан. Йәшелсәләр шулай уҡ ярайһы ғына туҡлыҡлы ризыҡ, калориялары ла аҙ. Аҡ ит организмдың углевод менән майҙарҙы энергияға әйләндереүен яйлата.

■ Бала йоҡоһоноң сифаты һәм оҙайлығы уның сәләмәтлегенең дөйөм торошо тураһында һөйләй. Статистика буйынса, бала тыуған ғаиләлә сабыйҙың йоҡоһона ҡағылған һөйләшеүҙәр тәүге урынға сыға. Боронғолар ҙа, йоҡлай, тимәк, үҫә, тигән һәм бында дөрөҫлөк бар, ти ғалимдар. Белгестәр фекеренсә, бала саҡта йоҡо менән бәйле проблемалары булған кешеләрҙең ҙурайғас, сәләмәтлектәре насыраҡ була икән. Шуға ла баланың йоҡоһона етди иғтибар бүлергә кәрәк.

■ Дархэм университеты неврологы Аманда Эллисон белдереүенсә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда һалҡын тейҙереү һәм киҙеү симптомдарын ауырыраҡ кисерә. Доктор әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егеттең баш мейеһе үҫешенең бер осоронда айырмалыҡтар барлыҡҡа килә. Күп күрһәткестәр, шул иҫәптән, тән температураһы өсөн яуап биреүсе баш мейеһе өлөшө ир-егеттәрҙә тестостерон бүленеп сығыу һөҙөмтәһендә тиҙерәк үҫешә. Мейенең был өлөшө организмға инфекция инеүенә шунда уҡ тәьҫир итә һәм үҙенең эшен башлай, һөҙөмтәлә, тән температураһы күтәрелә. Тимәк, ирҙәрҙә дәүмәл ағынан был мейе өлөшө ҙурыраҡ булыу сәбәпле, улар нығыраҡ сирләй.

■ Америка психологтары етештереүселәр сәләмәтлек өсөн файҙалы һәм түбән калориялы тип рекламалаған ризыҡтарҙы күп ҡулланмаҫҡа кәңәш итә. Эксперименттарҙа йөҙҙән ашыу кеше ҡатнашҡан. Фильм ҡараған мәлдә уларға "файҙалы" печенье тәҡдим итәләр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, әгәр ҙә үҙен дөрөҫ туҡланам тип уйлай икән, кеше күберәк ашай икән. Магазинда ла йышыраҡ "сәләмәт туҡланыу" тигән яҙыуға иғтибар итәләр. Әммә ризыҡтың калорияһын бөрәү ҙә иҫәпләп тормай. Был иһә һимереүгә алып килеүе бар.

МАТУР ХӘТИРӘ

# ИҪТӘ ҠАЛҒАН ЯҢЫ ЙЫЛ

**Беҙ Ғафури районының Родина ауылында, хәҙер үҙебеҙҙең телебеҙҙә Ватан тип йөрөтәбеҙ, йәшәйбеҙ. Бында йәшәүебеҙгә инде 44 йыл. Родина совхозы көслө ваҡыттарҙа клубыбыҙ бар ине, Яңы йыл һәм башҡа байрамдар ҙа гөрләп үтә ине. Замананың ҡаты дауылынан бөтә республикаға данлы агрофирмабыҙ ҙа емерелде. Клуб ремонтҡа ябылғайны, ул да шул емерек көйөнсә әлегәсә ауыл уртаһында ултыра. Эшселәрҙең ғүмер буйы бергәләп йыйған байлығы, барлыҡ техника, ферма һәм гараж биналары бөтә йыһаздары менән олигархтар ҡулына күсте.**



Был 2010-2011 йылдар ине. Эшһеҙ тороп ҡалған халыҡ өйҙәренә бикләнде. Башҡа ерҙә байрамдар, Яңы йыл үткәрәләр, ә беҙҙә юҡ, сөнки клубыбыҙ юҡ, көтөүсе-маҙар һайлар, башҡа йомоштарҙы йомошлар өсөн дә урамда йыйылабыҙ. 7 йыл тирәһе шулай дауам итте. Халыҡ байрамдарҙы онотто. Быны шул хужаһыҙлыҡ хөкөм һөргән 2013 йылда мине ауыл халҡы, ай-вайыма ҡарамай, староста итеп һайлап ҡуйҙы. Тәүге бер-ике айҙа нишләргә белмәйерәк йөрөһәм дә, бер ваҡыт минең башыма шәп уй килеп төштө бит, әй! Мин бит ауылдаштарым өсөн ниҙәрҙер эшләй алам!

Иң тәүҙә мин ауыл уртаһына бәләкәс кенә павильон ҡуйҙырҙым, унда ауыл халҡы үҙенен шәхси хужалығынан артҡан әйберҙәрен сығарып һата башланы. Быны ҡыш та килде, Яңы йылға ла күп ҡалманы. Ә минең ауылдаштарыма байрам һағыны килә. Күптән Яңы йыл байрамын күргән юҡ та инде! Был хаҡта әүҙем генә ауылдаштарым менән һөйләштем, улар ҙа минең уйымды хупланы. Тик барлыҡ биналарыбыҙ яңы хужалар ҡулында. Бәлки, улар менән һөйләшеп килешеп булыр? Киттем Хәсәнгә, ашханаға кирбестән төкөтөп эшләнгән иркен төкөтмәне һорарға. Минең башымда, Хәсән үтенесемде кире ҡағыр, тигән уй саҡ ҡына ла юҡ. Ә Хәсән: "Был бина элек һеҙҙеке ине, хәҙер минеке", - тип көлә. "Һин бит ошо ауылда эшләйһең, тимәк, халыҡҡа ярҙам итергә тейешһең", - тип ныҡышам. "Аҡса түләгеҙ", - тип ҡыйыша ул да. Уртаҡ фекергә килә алмай, кире боролоп ҡайтып киттем. Әҙерәк намыҫы уяндымы икән, иртәгәһенә был мине үҙе саҡыртып, ашхана төкөтмәһендә Яңы йыл уҙғарырға рөхсәт итте. Силсәүит рәйесе Әмир Хисаметдинов шыршы алып килде, Ҡыш бабайын да таптыҡ, Ҡарһылыуын да. Һәм нисәмә йыл байрамдар күрмәгән ауыл халҡы менән ололар ҙа, балалар ҙа бергәләп беҙ 2014 йылды ҡаршы алдыҡ! Был Яңы йыл байрамы беҙҙең бөтә ауыл халҡының иҫендә ҡалды.

Быны 2014 йыл башланды. Беҙгә кисекмәҫтән клуб кәрәк, тигән талап әлеге Яңы йыл кисәһендә үк бөрөләнгәйне. Ауылдың бер нисә әүҙем кешеһе менән Мәҙәниәт министрлығына хат яҙҙыҡ. Яуап оҙаҡ көттөрмәне, аҡса юҡ, бер тин дә булә алмайбыҙ, тиелгәйне унда. Ярар. Ә беҙгә бит клуб кәрәк! Минең башыма тағы бер бик шәп уй килде. Беҙҙең элекке 2 ҡатлы совхоз контораһы бинаһының 2-се ҡаты буш тора бит, ә унда иркен зал бар. Шул 2-се ҡатты клуб итеп юлларға кәрәк! Мин район хакимиәте юлын тапай башланым. Ғафури районы хакимиәте етәксеһе булып ул саҡта Рәмил Зәкәриә улы Бохаров эшләй ине. Районға был 2-се ҡатты Хәсәндән һалдырып алыу еңел булманы, ике суд аша үтеп, ниһайәт, йыл аҙағына табан Рәмил Зәкәриә улы: "Халыҡҡа әйт, контора бинаһының 2-се ҡаты һеҙгә клуб итеп бирелә", - тине. Был ноябрь айы ине. Оҙаҡламай Әсәйҙәр көнө етә, байрам үткәрергә урын бар хәҙер! Тик был бина футбол яланы шикелле яп-яланғас ине. Бар йыһаздар юҡҡа сыҡҡан. Оҙаҡ бошонмаҡыҡ, беҙҙең хәҙер йыйылырға урын бар, шуныһына һөйөндөк. Һәм беҙ төрлө милләтле ауыл халҡы менән бергә йыйылып, иҙәнгә ашъяулыҡ йәйеп, ризыҡтар теҙеп, самауыр борҡоратып, башҡортса ла, урыҫса ла йырҙар йырлап, бейеп, Әсәйҙәр байрамын үткәрҙек. Әлдә район мәсете иҙәнгә түшәргә элек беҙ үҙебеҙ уларға бүләк иткән балаҫтарҙы бирҙе. Район үҙәгенән "Хазина" төркөмөн ҡунаҡҡа ла саҡырҙыҡ әле беҙ сәхнәһеҙ, ҡоро ялан клубыбыҙға. Аҙаҡ силсәүитебеҙ Әмир Ғәйнетдин улы клубҡа 3 метр оҙонлоғондағы ике өҫтәл һәм дүрт эскәмйә эшләтеп бирҙе. Улар әлеге көндә лә беҙгә ҡунаҡ йыйған саҡтарҙа тоғро хеҙмәт итә.

Бынан һуң беҙ барлыҡ байрамдарҙы ла йыйылып, үҙ клубыбыҙҙа ҡаршылай башланыҡ, йыйылышып сәй эсеүҙәр ҙә үткәрҙек. Тәүҙәрәк йыйылыу тураһында иғлан яҙғанда мин "Өйҙән килтерелгән ҡуҫтәнәстәр менән сәй эсәбеҙ", тип иҫкәртә торғайным. Йәйләп, иҫкәртмәйенсә лә клубыбыҙға ҡуҫтәнәстәре менән йөрөргә өйрәнде халыҡ. Беҙгә бит бер тин дә аҡса биргән кеше юҡ.

Ә 2017 йылда беҙгә клубтың 1-се ҡатын да бирҙе Рәмил Зәкәриә улы. Сөнки аңһат ҡына халыҡ байлығына хужа булған, ситтән килгән, ауыл өсөн бер ярҙамы ла булмаған олигархтар үҙҙәре үк табан ялтырата башланы. Был юлы иһә уларға 1-се ҡаттағы йыһаздарҙың барыһын да алып китергә ирек ҡуймаҡыҡ, бинаның йоҙағын алыштырып, унда үҙебеҙ хужа булдыҡ.

Бынан һуң да иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиғалар күп булды. Яҙһаң, үҙе бер китап булырлыҡ. Ауыл халҡынан аҡса йыйып, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарына обелискыны ла районда беренсе булып Еңеүҙең 70 йыллығына беҙ, Родина -Ватан ауылында астыҡ. Аҙаҡ беҙҙең башланғысҡа районда бик күптәр эйәрҙе. Ауыл халҡынан китап йыйып, йәмғәт китапханаһы астыҡ. Ул ике йыл эшләгәс, уның нигеҙендә китапхана асылды. Клуб бинаһы ике ҡатлы булғас, унда медпунктҡа ла, элемтә бүлексәһенә лә урын табылды. Хәҙер инде беҙҙең клубыбыҙ гөрләп тора!

**Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА,
Ғафури районы
Родина-Ватан ауылы
старостаһы.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# ОҘАҠ ЙӘШӘЙЕМ, ТИҺӘҢ...



**Табиптар әйтеүенсә, ғүмер оҙайлы булһын өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан.**

Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, АҠШ-та йәшәүсе Дэйзи Макфадден уларҙың миҫалына эйәреп, емеш-еләк, балыҡ, йәшелсә менән туҡлана, уға ноябрь айында 101 йәш туласаҡ.

Оҙаҡ йәшәүселәр кәңәш итеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сей эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙеңә яраҡан аҙыҡтарыңды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар.

Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Коронавирустың тәүләп Көньяҡ Африка ерендә хасил булған омикрон тигән төрө донъя күләмендә хәүеф тыуҙырҙы: Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау (ВОЗ) ойошмаһы эксперттары уны 26 ноябрҙәге ашығыс кәңәшмәһендә тикшереп, "омикрон" тигән атама бирҙе.**



# ЯҢЫ ТАЖЗӘХМӘТ КИЛӘ...

Был вирус тәүгеләренән бик күп төрҙәргә бүленеү үҙенсәлеге менән айырылып тора, шуларҙың 30-ы тына ла коронавирус энәләре аҡһымында "йәшәй". Ғалимдарҙа иң ныҡ хәүеф тыуҙырыусы сәбәптәрҙең береһе - омикрондың тажзәхмәт менән ауырығандарҙың да хатта иммунитетына бирешмәүсәнлеге. Уның таралыу тиҙлеге һуңыраҡ, эпидемиологик мәғлүмәттәр туплана барыуына ҡарап билдәләнәсәк. Уның хасил булыу сәбәбе бынан алдағы төр вирус менән сирләп, тулыһынса дауаланып етмәгәнлектән, көсһеҙләнгән иммунитетлы ауырыуҙандыр, тип фаразлана. Көньяҡ Африка ғалимдары омикрондың күп һанлы үҙенсәлектәренә төшөнөү өсөн был хаҡта бөтөн донъя буйынса тикшеренеүҙәрҙе туплай һәм өйрәнә. Яңы варианттың таралыу тиҙлеге лә, сирҙең бынан алдағы вирустар менән сағыштырғанда ауыр йә еңел үтәме икәнлеге лә әлегә билдәһеҙ. Тәүләп был сир менән ауырыусылар университет студенттары араһында теркәлә һәм йәштәрҙең уны еңелсә үткәреүе асыҡланһа ла, тулы мәғлүмәт өсөн бер нисә көн йәки хатта аҙна кәрәк булыуы ихтимал.

Шуныһы хафаға һала: бынан алда коронавирус менән ауырыған кешеләрҙең "омикрон"ға тиҙ бирешеүҙәре һәм ҡабатлап сирләүҙәре ихтимал. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау белгестәре әлеге ваҡытта ҡулланылған дауалау сараларының, шул иҫәптән, вакциналарҙың яңы вирусҡа тәьҫирен өйрәнә, ә шулай ҙа вакцинаның сирҙе еңелерәк үткәреүгә һәм үлем осраҡтарын кәметеүгә булышлыҡ итәсәген таный. Әлекке кеүек үк, ПЦР-тестар "омикрон" вирусына ҡарата ла көсөндә ҡала. Шул уҡ ваҡытта башҡа төрлө тестар буйынса, экспресс-тестарҙы ла индереп, тикшеренеүҙәр бара. Әлекке вирус төрҙәренә ҡаршы дауалау сараларынан кортикостероидтар һәм интерлейкин-6-ға ҡарата рецепторҙарҙы тотҡарлаусы препараттар көсөндә ҡала. Башҡа төр дауалау саралары буйынса уларҙың мутацияға ҡаршы һөҙөмтәлелегенә анализдар үткәрелә.

"Омикрон" дан һаҡланыу саралары буйынса әлегә халыҡҡа ниҙәр кәңәш итергә була? Иң һөҙөмтәле сараларҙың береһе - халыҡ күп булған урындарҙа кешеләрҙән 1 метр аралыҡ тотоу; ауыҙ-танауҙы яҡшы ҡаплап торған битлектәр кейеү; бинаны яҡшы итеп, йыш елләтеү; кеше күп тупланған урындарҙа булмаҫҡа тырышыу; бит-ҡул гигиенаһын үтәү; тирһәкте бөгөп йүткереү һәм сөскөрөү, салфетка ҡулланыу; вакцина эшләтеү.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

Башҡорт дәүләт медицина университетының микробиология, вирусология кафедраһы мөдире, медицина фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Марсель Марат улы Тойғонов коронавирустың яңы варианты ҡайҙан килеп сығыуы, уны ҡасан һәм кем табыуы хаҡында һөйләй:

- Вирус даими рәүештә үҙгәреп тора. Коронавирус һәм грипп үҙен һаҡлау маҡсатында мутацияға бирелеп, яңынан-яңы штамм барлыҡҡа килтерергә һәләтле. Шуға күрә, әгәр кеше бер штамм менән ауырыһа, вакцина һәм иммуноглобулин әлеге штамға йоғонто яһамай. Был - тәбиғи процесс. Covid-19-ҙың, йәғни омикрондың ошондай тәүге штаммы Көньяҡ Африкала - Ботсванала барлыҡҡа килгән.

Юлдар асыҡ, кеше йөрөп тора, уның менән бергә вирус та тарала. Рәсәйҙә әлегә бер нисә осраҡ теркәлгән, әммә ул башы ғына булырға мөмкин, сөнки вирусты тулыһынса контролдә тотоп булмай.

Яңы штамм тураһында әлегә бик аҙ билдәле, сөнки клиник осраҡты әлегә беҙ белмәйбеҙ. Көньяҡ Африка вариантына ҡағылышлы уның тиҙ арала пневмонияға әйүерелеүе, йәғни инкубация осоро ҡыҫҡа булыуы һәм еҫ тойоу һәләте юғалыуы мәғлүм. Температура 38 градусҡаса йәки саҡ ҡына юғарыраҡ күтәрелә. Быға тиклем ауырыған кешеләр уны еңелерәк үткәрәсәк. Был антиматдәләрҙең "омикрон"дан да яҡлауы тураһында һөйләй.

Вирус яңы тулҡынды уятып ебәреүе ихтимал, сөнки үҙгәреп тороуы сәбәпле, яңы штамдан тулыһынса һаҡлана алмайбыҙ. Был бәләкәй генә тере микроорганизмдар ҡайһы берҙә контролдән сығып китеүе лә ихтимал. Шуға күрә, һаҡланып йөрөү мөһим. Битлек кейеү, ҡулды дезинфекция саралары менән эшкәртеү - бөтә вирустан да һаҡлай. Һәм, әлбиттә, вакцинация кәрәк, ул сир еңел үтеүенә булышлыҡ итә. "Вектор" Новосибирск фәнни үҙәге яңы штамдың үҙенсәлектәрен өйрәнде. Унда етештерелгән вакцинала коронавирустың әлекке штаммына оҡшаған антигендар булыуы тураһында мәғлүмәт бар. Бәлки, шул вакцина кешеләрҙе "омикрон" тыуҙырған сирҙән һаҡлар.

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Йома көндә ғөсөл ҡойон!

Ғайса ғәләйһиссәләм сәйәхәт ҡылып йөрөгәндә яланда уға кейек аулаусы әҙәмдәр осраған. Уларҙың йәтмәләренә бер кейек эләккән булған. Был кейек Ғайса ғәләйһиссәләмде күргәс, Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән телгә килеп: "Әй, Аллаһы Тәғәләнең бәйғәмбәре, минең бик кескенә, йәш балаларым бар, улар бик асыҡҡандарҙыр. Мин өс көндән артыҡ был тоҙаҡта бәйләнеп торҙом. Зинһар, йәтмә эйәһенән рөхсәт һорасы, мин ҡайтып балаларымды туйҙырайым да, унан тағы килермен. Унан аусы ни ҡылһа ла ҡылыр", - тип үтенгән. Ғайса ғәләйһиссәләм аусынан рөхсәт һораһа, уныһы: "Мин рөхсәт бирер инем дә, кейек ҡайтмаҫ шул, алғанлар", - тип шик белдергән. Ғайса ғәләйһиссәләм был һүҙҙәрҙе кейекҡә әйткән икән, ул: "Әгәр мин вәғәҙәлә тормайынса кире әйләнеп килмәһәм, йома көнөндә һыу табып та ғөсөл ҡойонмаған кешенән яуызыраҡ булырмын", - тигән. Нәтиҗәлә тотҡон кейек, вәғәҙә биреп, ҡайтып балаларын туйҙырған да, оҙаҡ та тормай, тиҙ генә аусының янына кире килгән.

Ғайса ғәләйһиссәләм быларҙы ҡалдырған да, юлын дауам иткән. Барған юлында бер ҡыҙыл кирбес табып алған, ти. Шул саҡ Аллаһы Тәғәлә тарафынан уның күңеленә: "Әй, Ғайса, был кирбесте ал да теге аусыға кейек хаҡына бир", - тигән фекер төшкән. Ғайса ғәләйһиссәләм был кирбесте алып, аусыға бирәйем, кейекте ҡотҡарайым, тип килһә, аусы инде кейекте боғаҙлап өлгөргән була. Ғайса ғәләйһиссәләм был хәлгә асыуланып: "Әй, Аллаһ, бының кәсебенән килгән бәрәкәт һәм файҙаны ала күр!" - тип доға ҡылған, ти. Был ҡиссаның асылы шулдыр: йома көнөндә ғөсөл ҡойонмау вәғәҙәләнгән хилафлыҡ ҡылыуҙан насарыраҡ, имеш.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Илаһҡа илткән оҙон юл

Бөгөнгө хәл-ваҡиғаларҙан бары тик кеше аңынан юғарыраҡ аңды ярҙамға саҡырып ҡына өҫтөн була алабыҙ. Шулай итеп, беҙ ошо аңдың сағылышына - бик мөхәббәтле, бик бай кешеләргә әйүерелербеҙ. Мин һеҙҙең турала әйтәм һәм Илаһтың кеше аңынан өҫтөн тороусы берҙәнбер сығанаҡ булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алам.

Көсөргәнештән арынып, үҙегеҙҙең өндәге төшөгөҙ менән идара итеп, хыялға бирелегеҙ. Быны эшләүе ауыр түгел. Кемдер бер ваҡыт: "Аллаһтан баш тартмағанбыҙ, ул ҡыҫырыҡлап сығарылған", - тигән. Ысынлап та, беҙ өндә төш күреү өсөн ваҡыт тапмайбыҙ.

Әгәр һеҙ идара итеп булған өндәге төш өсөн ваҡыт тапмаһағыҙ, һеҙгә бер кем дә ярҙам итә алмаҫ. Тормошоғоҙ еңеләймәҫ. Ул, Шекспир һүҙҙәре менән әйткәндә, "Алйот һөйләп биргән повесҡа оҡшар: унда һүҙҙәр һәм дәрт күп, тик мәғәнә генә юҡ".

Йыһанға рәхмәтле булып, Юғары аңдан ярҙам алырға әҙерһегеҙме?

Түбәндәге инструкцияны хәтерегеҙҙә ныҡлап ҡалғансы уҡығыҙ.

### Нисек итеп Илаһҡа яҡынайырға?

- Унайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Уйығыҙҙа ғына үҙегеҙ ултырған бүлмәне һүрәткә төшөрөгөҙ, уны яҡтылыҡ менән тултырығыҙ, уны яратығыҙ.
- Үҙегеҙ ултырған өйгә өҫтән ҡарайһығыҙ икән тип күҙ алдына килтерегеҙ, уны яҡтылыҡҡа сорнағыҙ, үҙегеҙҙең һөйөүегеҙҙе йүнәлтегеҙ.
- Өҫкәрәк күтәрелегеҙ һәм үҙегеҙҙе өҫтән ҡаланы ҡараған итеп хис итегеҙ, уны нур һәм һөйөү менән солғағыҙ.
- Тағы ла өҫкәрәк күтәрелегеҙ һәм ил өҫтөнә ҡарағыҙ. Уға ла яҡты нур һәм һөйөү йүнәлтегеҙ.
- Тағы ла өҫкәрәк үрләгеҙ. Планетаға яҡтылыҡ һәм һөйөү ебәрегеҙ.
- Хәҙер тотош галактика кимәленә күтәрелдегеҙ. Уға ла яҡты нур һәм һөйөү оҙатығыҙ.
- Нисек итеп һеҙҙә нур һәм һөйөү сағылғанды тойоғоҙ. Уны шул уҡ юл менән кире алып ҡайтығыҙ: Ҡояш системаһынан - Ергә, илегеҙгә, ҡалағыҙға, өйөгөҙгә, бүлмәгеҙгә.
- Күҙегеҙҙе асығыҙ һәм уйығыҙҙан ғына: "Мин үҙ аңымда һәм Илаһҡа яҡынлаштым",-тип әйтегеҙ.

Яҙманы ситкә алып ҡуйығыҙ һәм ошо пункттарҙа яҙылғанды эшләгеҙ. Лев Толстой: "Һәр кем нисек итеп Кешелекте үҙгәртергә, тип уйлай, әммә бер кем дә нисек итеп үҙен үҙгәртеү тураһында уйламай", - тип яҙған. Һеҙ әле генә үҙегеҙҙе үҙгәрттегеҙ, аңығыҙҙы киңәйттегеҙ. Хәҙер һеҙ үҙ ауылығыҙ, ҡалағыҙ, илегеҙ кешеһе генә түгел, һеҙ - донъя кешеһе. Ошо мәлдән алып тормошоғоҙҙа яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр башланыр.

Тик ни өсөн быға тиклем берәү ҙә - ата-әсәләр ҙә, уҡытыусылар ҙа, диндарҙар ҙа һеҙгә был хаҡта һөйләмәгән? Йә улар үҙҙәре лә был турала белмәгән, йә үҙҙәре һынап ҡарағандан һуң, быға алдан әҙерлек булырға тейеш, тип уйлаған. Һеҙҙең өсөн алдағы бүлектәрҙә яҙылғандар әҙерлек булды. Йүгереү өсөн тәүҙә шыуышырға һәм атларға кәрәк. Ә хәҙер һеҙ йүгерергә лә әҙер.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 20 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Крылья. [6+]**
**21.20 Хоккей. "Куньлунь РС" (Пекин) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Полет длиною в жизнь". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 21 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Афера века". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Мама приехала". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым.
2.20, 3.10 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.[12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.20 Хоккей. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Двойная жизнь". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 23 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 13.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.00 "60 минут". [12+]
14.00 Ежегодная пресс-конференция Владимира Путина.
19.00 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Собачья работа". [16+]
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Этно-краса". [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Букшоп". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Посетитель". [12+]**
**5.00 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 24 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.50 Х/ф "Любовь как несчастный случай". [12+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 "Самые важные открытия человечества". [12+]**
**10.30 "Автограф". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Мы дети войны. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.00 "Ҡуласа". [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Идеальный дворец Фердинанда Шеваля". [12+]**
**2.15 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 25 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Принцесса и нищенка". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Аист на крыше". [16+]
1.05 Х/ф "Я буду ждать тебя всегда". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Этно-краса". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Уроки добра Лизы Агадуллиной. [6+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомолист" (Екатеринбург). КХЛ.**
**19.30, 5.15 История одного села. [12+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Клуб любителей книг и пирогов из картофельных очистков". [12+]**
**3.00 Спектакль "Вот так случилось..." [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 26 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.20, 3.15 Х/ф "От сердца к сердцу". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
13.50 Т/с "Принцесса и нищенка". [16+]
17.40 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица". Финал.
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Молчун". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 Территория женского счастья.**
**13.00 "Сулпылар". [0+]**
**13.30 "Гора новостей". [6+]**
**13.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 3.00 Историческая среда. [12+]**
**16.30 IV Международный музыкальный фестиваль Ильдара Абдразакова. [12+]**
**17.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**18.00 "Радуга рулит".**
**19.00 Д/ф "Акмулла". [12+]**
**19.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.30 Х/ф "Рождественские приключения". [16+]**
**1.00 Спектакль "Дачники". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 декабрь Премьера! "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 12.00 6+
**22 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**23 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Йәнем, иртәгә тағы яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 16+
**24 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Һуңғы йәйләү"** (О. Жанайдаров), драма. 16+
**25 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00, 17.00 6+
**"Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**26 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 11.00, 13.00, 15.00, 17.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20-21 декабрь "Щелкунчик"** (Н. Соболева), әкиәт.10.00, 13.00 0+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 11.00, 13.30, 15.00 0+
**22 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), мажаралы әкиәт. 10.00, 13.00, 16.00 6+
**23 декабрь Премьера! "Арба"** (Т. һәм З. Бураҡаевалар), әкиәт. 11.00,14.00 6+
**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.30, 15.00 0+
**24 декабрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 10.00, 13.00, 16.00 0+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 11.00, 13.30, 15.00 0+
**25 декабрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 10.00, 13.00 0+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 12.00, 15.00, 17.00 0+
**Премьера! "Кыш бабай и Дед мороз"** театрлаштырылған тамаша. 12+
**26 декабрь "Синяя птица"** (М. Метерлинк), әкиәт. 12.00, 15.00, 18.00 6+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 12.00, 15.00, 17.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25-26 декабрь "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 11.00, 14.00, 17.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 декабрь Премьера! "Достоевский FM"**. 6+
**23 декабрь "Ҡышҡы хистәр ҡайнарыраҡ"** Л. Ишемйәрова концерты. 6+
**24 декабрь "Главный Новогодний утренник Уфы"** ғаилә өсөн тамаша. 11.00, 13.00 0+
**25 декабрь "Главный Новогодний утренник Уфы"** ғаилә өсөн тамаша. 11.00, 13.00 0+
**"Baby-елка"** 3 йәшкә тиклемге балалар өсөн тамаша. 12.00, 16.00, 18.00 0+
**26 декабрь "Главный Новогодний утренник Уфы"** ғаилә өсөн тамаша. 11.00, 13.00 0+
**"Baby-елка"** 3 йәшкә тиклемге балалар өсөн тамаша. 12.00, 16.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20-26 декабрь "Буль-буль-буль"ный Новый год или волшебный посох Деда Мороза"**, әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+
**20-29 декабрь** Йылайыр, Хәйбулла, Ейәнсура районларында гастролдәрҙә **"Нарру Яңы йыл в сказочном царстве"**, әкиәт. 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20-26 декабрь Премьера! "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Нигматуллина), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23 декабрь "Килдең, киттең - хуш байгош..."** (М. Задорнов), лирик комедия. 12+
**25 декабрь "Атты ектем! Айға осам..."** (В. Шукшин), ауыл комедияһы. 18.00 12+
**26 декабрь Премьера! "В поисках утраченного волшебства"** (М. Хейфец), әкиәт. 12.00 0+
**"Һатам! Иремде һатам"** (Н. Гәйетбаев), комедия. 18.00 12+

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# "ӘҘӘБИӘТ - ЗАМАН ТАУЫШЫ"




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**50-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сибай. Ашҡаҙар. Рәсем. Алаша. Бүгәс. Мөғлифә. Буддизм. Зулус. Азамат. Абхаз. Күк. Ильяс. Әмер. Ринг. Томан. НЛО. Әсә. Вольтер. Кәкүк. Элмәлек. Любизар.

**Вертикаль буйынса:** Буранбай. Абдрахман. Илизаров. Арыш. Оруэлл. Амман. Соҡор. Кегль. Тәкә. Сәлимәкәй. Әреме. Йәрем. Кер. Бәҙ. Иртәк. Урал. Улъя. Сәс. Сөн.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1443 һижри йыл.

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (16) дүшәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 21 (17) шишәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 22 (18) шаршамбы | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 23 (19) кесе йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 24 (20) йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 25 (21) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 26 (22) йәкшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Хеҙмәттәштәребеҙ - **Алһыу Кинйәбаева** менән **Артур Батыршиндың** ҡыҙҙары тыуҙы. Айғынам тип исем ҡуштылар сабыйға. Атай-әсәйенә сикһеҙ ҡыуаныстар алып килгән Айғынам бәхет-тәүфиҡлы, һау-сәләмәт булып, иш булып үҫһен, йәш ғаиләгә нур, ҡот, ырыҫ өҫтәһен. Алһыу менән Артурға киләсәктә лә рух ныҡлығы, күңел күтәренкелеге, маҡсатлылыҡ, уңыштар теләйбеҙ.

**Ҡотлау һәм иң-иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА




# ЯҢЫ ЙЫЛДЫ ҠАРШЫЛАЙБЫҘ

**Ҡытай календарына ярашлы, Күк Һыу Юлбарыҫ йылы 2022 йылдың 4 февраленда киләсәк. Яңы йыл хужаһы дәрт-дарманлы, маҡсатлы, тәрән аҡыллы, ҡыҙыҡһыныусан, үҙһүҙле.**

Юлбарыҫ (Барыҫ) йылы тормоштоң бөтә өлкәләренә лә үҙгәрештәр индерәсәк, тип көтөлә. Әгәр ҙә эш урынығыҙҙы алмаштырырға, икенсе ҡалаға йәшәргә күсергә, оҡшаған эшегеҙ менән шөғөлләнә башларға, яратҡан кешегеҙҙе табырға теләһәгеҙ - йыл хужаһы мотлаҡ булышлыҡ итер. Ул маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бик күп көс түктерһә лә, ваҡытында ял да итә белә. Етмәһә, быйыл Һыу барыҫы булғанға күрә, һыу энергияһына бәйле барлыҡ нәмәләр көнүҙәк буласаҡ: ижад, аралашыу, сауҙа, мәғлүмәти процестар. Һыу - ағым, шуға 2022 йыл барлыҡ йондоҙлоҡтарҙың тормошона үҙгәрештәр алып киләсәк. Шуға ғәҙәттәрҙе яҡшыға үҙгәртеү файҙалы буласаҡ.

Юлбарыҫ йылында тышҡы матурлыҡҡа, ҡиәфәтегеҙгә иғтибар бүлеү ҙә мөһим. Сөнки йыл хужаһы гүзәллекте үҙ итә.

2022 йылда мөхәббәт өлкәһендә ыңғай үҙгәрештәр күп булмаҡсы. Яңғыҙҙарға буласаҡ тормош иптәшен осратыу, бәхетле ғаилә ҡороу мөмкинлеге асыласаҡ. Ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе нығытыу йәһәтенән туғандар менән бергә күберәк ваҡыт уҙғарырға, күмәкләшеп сәйәхәт итергә кәрәк буласаҡ.

Ышанабыҙмы-юҡмы, 2022 йылғы Барыҫ үҙенә һыу һәм ағас энергияһын йыйған, тип иҫәпләнә. Шуға күрә ул ерҙе ярата. Уны ыңғайлатыу өсөн байрам кисендә күк, зәңгәр, һоро, охра, йәшел, зәйтүн, һары, алтын өҫөндәге кейемдәрҙә булырға кәңәш ителә. Ялтыр муйынсаҡтар, мәрйендәр ҙә урынлы буласаҡ - улар Ҡояш нурында ялтырап ятҡан һыу өҫтөн хәтерләтә. Ә бына хайуандарҙы хәтерләткән һүрәтле кейемдәрҙән баш тартырға кәрәк.

Яңы йылда яңы тормош башларға әҙер булыу өсөн ҡайһы бер эштәрҙе алдан хәстәрләп ҡуйыу мөһим. Мәҫәлән, байрамдан бер нисә көн алда йыйыштырыу эштәрен атҡарып сығығыҙ. Сандарҙы һөртөгөҙ, иҙәндәрҙе йыуығыҙ, кәрәк икән, хатта әйберҙәрҙе урынынан күсереп ҡуйығыҙ. Яңы йыл өйҙәге яңы һәм таҙа энергиянан башланырға тейеш. Кәрәкмәгән, бүтән ҡулланмаған һәм шкафтарҙа өйөлөп, урын алып ятҡан әйберҙәрҙе таратығыҙ. Өй эсендә юлбарыҫты һынландырған берәй биҙәүес ҡуйырға була.

Байрам кәйефен булдырыу, күңелде күтәреү маҡсатында шыршы биҙәп ҡуйығыҙ, бик булмаһа, янып торған гирляндалар элегеҙ. Әйткәндәй, шыршыла күк һәм зәңгәр төҫтәге уйынсыҡтар күберәк булһа, яҡшыраҡ.

Яңы йыл төнөндә кейгән ниндәйҙер бер әйберегеҙ өр-яңы булһын: йөҙөк, муйынсаҡ, һырға йәки күлдәк һ.б. Шыршыға кәнфит рәүешендәге уйынсыҡтар элһәгеҙ - был йортҡа етешлек килтерер. Мөхәббәтегеҙҙе осратырға теләһәгеҙ, йөрәк формаһындағы уйынсыҡтар элеү кәрәк һәм мотлаҡ парлы булһындар.

2022 йылды ҡаршы алғанда өҫтәлдә итле аштар күберәк булырға тейеш. Ит төрҙәрен һайлағанда ла бер ниндәй ҙә сикләүҙәр юҡ. Емештәрҙе лә күп ҡуйырға кәрәк, бигерәк тә мандарин, әфлисун, хөрмә, ананас кеүектәрен. Сөнки ҡыҙғылт һары төҫтәге йәшелсә-емеш яҡшы тәьҫир итәсәк, тәмлекәстәр һәм торттар ҙа урынлы буласаҡ.

*✓ Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.*
*(Франсуа Мориак).*



АФАРИН!

# МИЛЛИ КЕЙЕМ ТАНТАНАҺЫ





**Башҡорт теле көнөндә Өфөлә "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсына йомғаҡ яһалды. Проект һөҙөмтәләре буйынса еңеүселәрҙең исемдәре билдәле булды һәм бүләкләү тантанаһы уҙҙы.**

Еңеүселәр "Башҡорт халыҡ кейеме - реконструкция", "Заманса автор костюмы", "Балалар кейеме", "Башҡорт милли биҙәүестәре" һәм "Башҡорт традицион костюмы аксессуарҙары" номинацияларында билдәләнде. Бынан тыш, социаль селтәрҙә "Тамға" халыҡ-ара конкурсы төркөмөндә ойошторолған тауыш биреү йомғаҡтары буйынса финалсылар араһында "Тамашасылар һөйөүе призы" номинацияһында еңеүсе иғлан ителде. "

- 2020 йылда конкурс эштәре араһында стилләштерелгән, сәхнә костюмдары күберәк булһа, быйыл "Башҡорт халыҡ кейеме - реконструкция" һәм "Балалар кейеме" номинацияларында күберәк эштәр алдыҡ. Был - оҫталарҙың, былтырғы лауреаттарҙың әүҙем эше һөҙөмтәһе. Йыл дауамында республикала һәм Рәсәй төбәктәрендә башҡорт милли кейемен һәм уларҙың элементтарын тегеү буйынса бик күп оҫталыҡ дәрестәре уҙғарылды, - тине Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Артур Әлибәков.

Жюри ағзалары Артур Батыршиндың "Башҡорт милли кейеме - реконструкция" номинацияһындағы эшен юғары баһаланы. Ул билдәле фотограф Сергей Михайлович Прокудин-Горскийҙың 1910 йылдың йәйендә Ҡатаутамаҡ эргәһендә төшөрөп алған "Башкиръ стрелочникъ" фотоһүрәтенән кейем-һалым һәм элементтар реконструкцияһын тәҡдим итте. Фотола традицион ҡара

сәкмән, киң ыштан, сабата һәм кейеҙ ҡалпаҡ кейгән башҡорт һүрәтләнгән.

- Мин "Киске Өфө" гәзите редакцияһында эшләйем, "Мәргән уҡсы" хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашам. Башта тәүсығанаҡты ентекләп өйрәндем. Фото сифаты яҡшы булғас, унда бар әйберҙәр асыҡ күренә. Башҡорттарҙың тәүге төҫлө фотоһүрәттәренең береһе булыуы менән дә был сығанаҡ бик мөһим. Негативы Америка Ҡушма Штаттары Конгресы китапханаһында һаҡлана. Сәкмәнде тормош иптәшем Алһыу менән етен туҡыманан тектек, ул да башҡорт милли кейемдәрен реконструкциялау менән шөғөлләнә. Бөтә элементтарҙы ла тап килтерергә тырыштыҡ. Тимер юл хеҙмәткәре аксессуарҙары араһында фонарь, сигнал флагтары, борғо бар, уларҙы ла күрһәттек, - ти Артур Батыршин.

Шулай итеп, "Балалар кейеме" номинацияһында еңеүселәр: Иҫәкәева Зәлиә (Силәбе өлкәһе) һәм Ҡурамшина Гөлназ (Мәскәү); Искәндәрова Гүзәл (Ҡырмыҫҡалы районы), Насирова Зөлфиә (Өфө).

"Заманса автор костюмы" номинацияһында еңеүселәр: Тажетдинова Гөлнара (Сибай) һәм Краснова Зөлфиә (Туймазы районы); Исхаҡова Альбина (Өфө), Лякина Констанция һәм Моталова Айгөл (Өфө); Юлдашбаева Роза (Өфө).

"Башҡорт милли биҙәүестәре" номинацияһында еңеүселәр: Махнёва-Метусова Мария (Өфө); Әбсәләмов Ришат (Өфө); Шахаев Марат (Өфө).

"Башҡорт халыҡ кейеме - реконструкция" номинацияһында еңеүселәр: Шәйәхмәтов Илдар (Өфө), Хөсәйенова Гөлсөм (Өфө) һәм Аҡбулатова Дилара (Өфө); Вәлиева Ғәбиҙә (Өфө), Дәүләтова Хәмдиә (Ғафури районы) һәм Әхтәмова Сәйҙә (Балаҡатай районы); Батыршин Артур (Өфө) һәм Ғәлиуллина Айгөл (Өфө).

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОЯТЫ ЮҠ УЛ ЯМАН,

## ҠЫЛЫҒЫ ЮҠ ҠЫҘ ЯМАН

Бер эшен башлаған, икенсеһен ташлаған - береһен дә ослап сыға алмаған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙенең иң яҡшы ғүмер йылдарын иң насар заман килерен көтөп йәшәгән кеше - пессимист.

**(Б. Крутиер).**

Йәшәй белеү сәнғәте - ул тейешле поезға ултырыу ғына түгел, ә тейешле туҡталышта төшөп ҡала белеү ҙә.

**(А. Зигфрид).**

Һәр көнөң - бәләкәй генә ғүмер: һәр иртән йоҡонан уяныуың - бәләкәй тыуыуың, һәр иртәң - бәләкәй йәшлегең, һәр кисең һәм йоҡларға ятыуың - бәләкәй генә үлемең.

**(А. Шопенгауэр).**

Тормош ҡануны шулай: бер ишек ябыла икән, икенсеһе асыла. Ләкин бөтөн бәлә шунда: беҙ ябылған ишеккә ҡарап тороп, асылғанына иғтибар итмәйбеҙ.

**(А. Жид).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Франсуа Мориак).**

**Тағы бер риүәйәт: "Суфый мөғәллиме Баязит үҙенең уҡыусыларына йыш ҡына: "Аң булығыҙ!" - тип ҡабатлай торған булған. Уҡыусылары аңламайынса: "Нимә һуң ул аң булыу?" - тип һораған. Һүҙ менән генә аңғартып булмаҫ, тип, Баязит уҡыусыларын йылға буйына алып киткән. Улар килеүгә Баязиттың ҡушыуы буйынса тар ғына күпер һалып ҡуйылған була. Шунда уҡытыусы былай ти: "Аң булыу" тигәнде аңлау өсөн һеҙгә хәҙер ошо күпер аша теге яҡ ярға сығырға тура килер". Күпер шул тиклем тар була, шуға ла уҡыусылары уҡытыусыларының тәҡдименә шаҡ ҡата: "Күпер бит бик тар, уның аша сығыу ҡурҡыныс!" - ти улар. Баязит уларға: "Һеҙ ерҙән атлағанда ла шундай уҡ тар аралыҡта йөрөйһөгөҙ бит. Ни өсөн ике ярға эленгән күперҙән атлай алмаҫҡа тейешһегеҙ һуң?" Уҡыусыларҙың бер нисәһе күпер аша атларға маташа ла, ҡурҡып, кире борола. Шул саҡта ҡарт мөғәллим күпер аша үҙе сығып китә. Уның артынан бер нисә уҡыусыһы эйәрә. Улар теге ярға сыҡҡас, Баязит алдына тубыҡлана һәм шулай тип ҡысҡыра: "Рәхмәт, уҡытыусыбыҙ, беҙ хәҙер "аң булыу" тигәндең мәғәнәһенә төшөндөк. Күпер аша сыҡҡанда ҡурҡыныс шул тиклем ҙур ине, беҙ бер генә секундҡа ла иғтибарҙы ситкә йүнәлтергә тейеш түгел инек. Аң булыу арҡаһында беҙ был ауырлыҡты еңдек..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21051

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу** **246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3250
Заказ - 1536